✓ *Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Һеҙ ҙә "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына ҡушылып, гәзитебеҙҙе туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәрегеҙгә, мәктәптәргә, мәсеттәргә, дуҫтарығыҙға һәм таныштарығыҙға яҙҙырып бүләк итә алаһығыҙ. РФ Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаева, "Башбланкиздат" нәшриәте директоры Гөлсәсәк Әлибаева башланғысына ҡушылып, был юлы матур йолабыҙҙы Стәрлетамаҡтан Әхмәт Аҫылбәков күтәреп алды һәм Ғафури районындағы туғандарына "Киске Өфө" гәзитен яҙҙырып бүләк итте.*



ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

1 - 7 НОЯБРЬ (ҠЫРПАҒАЙ) 2014 йыл

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№44 (618)

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Бер бала менән сикләнеү...**

иманыумы, әллә яҙмыш ҡушыуымы?



6

**Ир-егеттәр һәм... ауылдар**



6 Был бәйләнештең ҡаҡшауы ниндәй бәләләргә тарыта?

**Халыҡ ижадында...**



11 бөгөнгөбөҙ ҙә, киләсәгебеҙ ҙә

**Һаҡланғанға...**

киҙеү ҙә, Эбола ла ҡурҡыныс түгел



12-13

14 ТВ-программа

ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!

## ХЕҘМӘТ КЕШЕҺЕ...

## тормошобоҙҙо алға этәреүсе көс

**Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм ХӘМИТОВ Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары алдында сираттағы Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһаны. Уның төп темаһы булып хеҙмәт кешеһе генә түгел, ғөмүмән, кеше тора.**

БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары сығыш буйынса үҙ фекерен белдереп, унда ҡуйылған бурыстарҙы ғәмәлгә ашырыу артыҡ сығымдар талап итмәйәсәген, ә республика бюджетында ҡаралған финанстар нигеҙендә тормошҡа ашырыласағын билдәләне. Сөнки Мөрәжәғәтнамәлә телгә алынған өҫтөнлөклө бурыстар һәм йүнәлештәр - улар власть органдарының көндәлек башҡарған һәм башҡарырға тейешле эшмәкәрлеген тәшкил итә. Шулай уҡ дәүләт башлығының сығышында ауыл халҡына айырым иғтибар бирелеүе лә, ауылға ярҙам булырлыҡ аныҡ тәҡдимдәр индерелеп, уларҙы тормошҡа ашырыу бурысы аныҡ ведомстволарға йөкмәтелеүе лә күңелде йылыта. Бары тик улар ҡағыҙҙа ғына ҡалмаһын, үтәлһен ине.

**(5-се биттә уҡығыҙ).**

ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## *Халыҡтар берҙәмлеге һеҙҙең өсөн нимә аңлата, һеҙ уны нисек итеп күргегеҙ килә?*

***Рәшит ШӘКУР, шағир, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, профессор:*** Әлеге ваҡытта бер үҙе генә бер дәүләт булып йәшәгән халыҡтар һирәктер. Миҫалға Монголияны алып ҡараһаҡ, унда ла барыбер әҙ генә булһа ла башҡа халыҡ вәкилдәре бар. Япония - нигеҙҙә бер милләтле дәүләт. Ләкин ундай бәхет һәр кемгә лә тәтемәй. Беҙҙең Рәсәйҙә федерализм шарттарында күпселек төп милләттәр йәшәгән территорияларҙа милли-территориаль автономия моделе ҡабул ителде. Бөгөнгө көндә лә беҙ үткән быуаттың 17-19-сы йылдарында формалашҡан ошо модель шарттарында йәшәп ятабыҙ. Бында нимә мөһим һуң? Беренсенән, милли республикалар - бындағы төп халыҡтың тарихи тыуған-йәшәгән ерҙәре. Икенсенән, был территорияларҙа тарихи дәүерҙәр эсендә тиҫтәләрсә бүтән халыҡтар килеп урынлашҡан, беҙгә күршеләр булып йәшәп яталар. Беҙгә был шарттарҙа нимә ҡиммәт? Быуаттар буйы күрше булып йәшәү шарттарында халыҡтар бер-береһен нығыраҡ таный, белә; улар тел, мәҙәниәт, рухиәт, тарихты белеү йәһәтенән бер-береһенә яҡыная барған һәм, Тукай әйтмешләй, "тел үә лөғәт алмашып" йәшәргә өйрәнгән. Бөгөнгө көндә лә шул традицияларҙы дауам итеп, бер-берендә хөрмәт итеп, бер-берендә кәмһетмәйенсә, тырнаҡ аҫтынан кер эҙләмәйенсә йәшәү бөтәбеҙ өсөн дә иң ҡулайлыһы.

Әлбиттә, республика булғас, төп халыҡ ниндәйҙер айырым үҙенсәлектәрен һәм ҡайһы бер мәсьәләләрҙә хоҡуҡи мөмкинлектәрен һаҡлап ҡала. Уны ла танырға, ихтирам менән ҡарарға кәрәк. Халыҡ берҙәмлеген мин тап шунда күрәм дә инде. Әйтәйек, Рәсәйҙәге милли республикаларҙың барыһында ла урыҫ теле менән бер рәттән төп халыҡ теле лә дәүләт теле тип рәсми рәүештә нығытылған. Тимәк, дәүләт телдәрен, шул уҡ ваҡытта ошоно раҫлаған Рәсәй һәм милли республикаларҙың төп Законы- Конституцияны ихтирам итеп, һанлап, законды үтәп йәшәү халыҡтар араһында яҡшы мөнәсәбәт һәм берҙәмлек, татыулыҡтың нигеҙе булыр ине. Ә хөрмәт күрһәтеүҙең төрлө юлдары бар: фестивалдәр, конкурстар, башҡа төрлө байрамдар үткәреү. Бынан ике йыл элек булһа кәрәк Башҡортостан телевидениеһында "Башҡорт теле көнө" уҙғарылғайны. Унда күп халыҡ ҡатнашты, бөтәһенә лә оҡшаны. Мин дә бындай йоғонтоло сараны хуплап, матбуғатта сығыш яһағайным. Был да бик һәйбәт. Төрлө милләт балаларының "Урал Батыр" эпосын башҡорт телендә яттан һөйләүе лә республикала төп халыҡтың теленә ихтирам тәрбиәләүҙең бер сараһы булып тора.

Республикабыҙҙа йәшәгән татар, украин, белорус, сыуаш, удмурт, мари, мордва һәм башҡа халыҡтарҙың балаларына мәктәптәрҙә туған телдәрен уҡытыу юлға һалынған. Хатта Архангел районында йәшәгән аҙ ғына һанлы латыштарға ла туған телдәрен өйрәнеү мөмкинлеге тыуҙырылған. Шул уҡ ваҡытта улар үҙҙәре йәшәгән дәүләт телдәрен дә ихлас өйрәнә. Йәки, мәҫәлән, күптән түгел Аҫҡын районында булып ҡайтыуыбыҙ тураһында. Һөйләштәр төрлө булыуға ҡарамаҫтан, районда башҡорт әҙәби телен яратып өйрәнәләр. Балаларҙың матур итеп башҡортса сығыш яһауҙарын тыңлап, күңелебеҙ булды. Аҫҡын да шул уҡ Бөрйән һымаҡ икән, тип ҡайттыҡ. Әйткәндәй, башҡорттарҙың теле 3 диалекттан, 16 һөйләштән тора, ләкин беҙҙе милли әҙәби тел берләштереп тора. Халҡыбыҙ өсөн милли әҙәби тел - хәҙерге дәүерҙә рухи туғанлыҡтың ғына түгел, милли тел берҙәмлегенең дә иң мөһим шарты ул.

**(Дауамы 2-се биттә).**

МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ

## БЕР-БЕРЕБЕҘГӘ ЫШАНЫСТЫ...

## аҡлап йәшәйек

**Бер саҡ фәйләсүфтар батшаһы Сократ бер үҫмерҙе шаяртырға була һәм унан: "Ҡайҙа зәйтүн майы һатып алып була?" - тип һорай. "Баҙарҙа",- тип ышаныслы яуап бирә үҫмер. "Ә белемде ҡайҙа һатып алып була?" - ти Сократ. Үҫмер ҡаушап ҡала һәм: "Белмәйем",- тип яуаплай. "Минең арттан эйәр!" - тип тәҡдим итә аҡыл эйәһе... Бына 12 йыл инде "Белем, Фәһем, Аҡыл эҙләп, "Киске Өфө" гәзитенә мөрәжәғәт итеү ғәҙәтегеҙҙе ҡуймаһағыҙ, беҙҙең арттан эйәрһәгеҙ ине", тип саҡырабыҙ беҙ ҙә уҡыусыларыбыҙҙы. Ошо саҡырыуыбыҙ күңелдәргә уй, ғәм, сәм орлоғо һалһын ине лә, улар шытым бирһен ине, тип өмөтләнәбеҙ. Ә өмөттәр барыбер ҙә яйлап булһа ла аҡлана килә...**

**(Дауамы 2-се биттә).**



✓ *"Киске Өфө" тигән гәзитте ойоштор, тип ҡулыма тотторған саҡта тәбиғәте менән сабый, әммә ошо яңы замандың зәңына, ҡатмарлы ҡанундарына яраҡлаша алмай, бер аҙ баҙап ҡалған кешеләрҙе күҙ алдыма килтерҙем.*



ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## Халыҡтар берҙәмлеге һеҙҙең өсөн нимә аңлата, һеҙ уны нисек итеп күргегеҙ килә?

(Башы 1-се биттә).

***Тамара ҒӘНИЕВА, шағирә:*** Халыҡтар берҙәмлеге - ул бик мөһим мәсьәлә. Мин уҡыған мәктәптә күп милләтле балалар белем ала ине, беҙ шуға күрә лә интернациональ рухта тәрбиәләндек. Аҙаҡ, тыуған ауылымдан ситкә китеп уҡый һәм эшләй башлағас, миңә бигүк "сәләмәт" булмаған милләт-ара мәсьәләләр һәм мөнәсәбәттәр тураһында белеү бик сәйер тойолдо. Дөрөҫөн генә әйткәндә, халыҡтар берҙәмлеге - ул иң тәүҙә именлек гарантияһы. Уртаҡ илебеҙ, уртаҡ еребеҙ, уртаҡ ҡаҙаныштарыбыҙҙы берҙәмлек менән генә яҡлай һәм һаҡлай алабыҙ, шуны онотмау мөһим был тәңгәлдә. Әҙәби мөхит вәкиле булараҡ, берҙәмлекте мин иң беренсе сиратта рухи берҙәмлектә - әҙәбиәттәр дуҫлығында күрәм. Бар ине шундай замандар: совет иле тигән бөйөк держава төрлө милләтле туғандаш халыҡтар берҙәмлеге менән ҡеүәтле булды. Ана шул эскерһеҙ дуҫлыҡты нығытыуҙа яҙыусыларҙың ролен дә хәтерләйһегеҙҙер. Беҙҙең Мостайыбыҙ булһа, уның дуҫтары йөҙ ине: авар Рәсүл Ғамзатов, балҡар Ҡайсын Ҡулиев, ҡалмыҡ Давид Кугультинов, ҡырғыҙ Сыңғыҙ Айтматов, украин Микола Нагнибеда, татар Хәсән Туфан, сыуаш Яков Ухсай, ҡабарҙа Алим Кешоков, йәнә лә бик-бик күптәр... Ул саҡтарҙа халыҡтар араһындағы туғанлыҡ йылыны һәм берҙәмлек тойғоһо, ихласлыҡ һәм киң күңеллелек тап бына ошо әҙәби титандар дуҫлығына таянып тора ине лә инде. Халыҡтар берҙәмлеге көнөн билдәләү һәм шуның менән ошо мәсьәләгә тағы бер тапҡыр йәмәғәтселек иғтибарын йүнәлтеү айырыуса көнүҙәк һәм кәрәк, тип иҫәпләйем. Тик шуныһын да әйтеү кәрәктер: был календарь битендә сираттағы ҡыҙыл дата ғына түгел, ә айырым бер йөкмәтке һалынған маҡсатлы сара, шуға йүнәлешле махсус программалы формаль булмаған көн итеп үткәрелһен ине.

***Рәйес ФӘЙЗУЛЛИН, хеҙмәт ветераны:*** "Берҙәмлектә - көс", ти халыҡ. Тимәк, йәшәйешебеҙ принциптарына ҡаршы килгән, тыныслығыбыҙҙы боҙған яман күренештәргә ҡаршы торорлоҡ ҡеүәт тә ул берҙәмлек. Халҡы бер төптән булып, татыу йәшәгән илгә ситтән бер ниндәй ҙә хәүеф-шөбһә янамай. Ә инде илдә берҙәмлек булмаһа... Бының нимәгә килтереүенә бик асыҡ миҫал бөгөн - Украина. Ватанын ҡапма-ҡаршы лагерға бүлеп, үҙ халҡының тыныс тормошон туҙҙырып, аҫтын-өҫкә килтереү генә түгел, күпме халҡының (хатта сабыйҙарҙы ла йәлләп тормаһылар) ғүмерен ҡыйҙы украин милләтселәре. Юҡҡа ғынамы ни халҡыбыҙҙың боронған килгән "Берҙәм өйҙә бәрәкәт бар, ғауғалы өйҙә һәләкәт бар" тигән һынамышы йәшәп килә. Украиналағы хәлдәрҙе күргәндән һуң, тыныслыҡ, берҙәмлек ҡәҙере, уның баҫе тағы арта төшә. Ғибрәттән фәһем алып, бер-беребеҙҙе ихтирамлы булып, кешесә йәшәһәк ине, тигән теләктә ҡалам.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.

МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ

# БЕР-БЕРЕБЕҘГӘ ЫШАНЫСТЫ...

## аҡлап йәшәйек

(Башы 1-се биттә).



Эйе, 2012 йылдың 6 ноябрендә Өфө ҡалаһы тарихында башҡорт телендәге тәүге баҫма булараҡ барлыҡҡа килде "Киске Өфө". Ул саҡта шәғбан айы тамамланып, Исламдың иң хөрмәтле рамаҙан айы башланып тора ине. Шуға ла байтаҡ зыялыларыбыҙ, шулар иҫәбендә Башҡортостандың халыҡ шағирҙары Мостай Кәрим, Рауил Бикбаев, Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты мөфтөйө Нурмөхәмәт хәҙрәт Ниғмәтуллин гәзитебеҙ сыға башлауҙы хәйерләгә юрап, фатиха һүҙе әйткәйне. "Беҙҙең шағирҙарҙың, яҙыусыларҙың күпселеге ауылда тыуһа ла, Өфөлә йәшәй. Гәзит-журналдарыбыҙ Өфөлә сыға. Китаптарыбыҙ Өфөлә ташҡа баҫыла. Ҡыҫҡаһы, Өфө Башҡортостандың һәм түгел, башҡорт әҙәбиәтенең дә баш ҡалаһы ул. Өфөлә башҡорт телендә ҡала гәзите сыға башлауы - ул суверенитеттың матур ҡаҙаныштарының береһе. Ул башҡорт теленә дәүләт статусы биреләүҙең рәсми ҡағыҙҙа ғына ҡалмауын, ә ғәмәлгә ашырылыуын раҫлаусы мөһим бер күренеш ул", - тигәйне үҙенең ҡотлау һүҙендә Рауил Бикбаев.

"Заманында Өфө урыҫ ҡалаһы ине. 60-70 йыл элек баш ҡаланы башҡорттар ҙа, татарҙар ҙа, башҡа милләттәр ҙә үҙ итте. Шуға ла "Киске Өфө"нөң үҙ уҡыусылары буласағына иманым камил", - тигәйне ул саҡта Мостай Кәрим.

Ысынлап та, гәзитебеҙ сыға башлағас, "Нимәгә кәрәк ул Өфөгә башҡорт гәзите?" тигән ҡараш менән дә кәрәшергә, баш ҡалабыҙҙа баҫмабыҙҙың уҡыусылары байтаҡ буласағын әленәнәле раҫлап торорға ла тура килгәйне. Ә бының өсөн, әлбиттә, Өфөләге уҡыусыларыбыҙҙың кимәлен, дәрәжәһен тойоп, улар зауығына, талабына ярашлы һүҙ әйтергә, лайыҡлы йөкмәтке булдырырға кәрәк ине. Был талап аҙмы-күпме күҙаллана ине: Өфө уҡыусыны юғары фекерле, үҙенсәлекле зауыҡлы халыҡ. Улар баш ҡалаға ауылдарҙан килеп төпләнгән, белем алған, юғары дәрәжәләр яулаған кешеләр, туған телде лә яҡшы беләләр, ләкин туған телдәге баҫмаларҙы бик уҡый һалып бармайҙар. Ни өсөн? Мин был һорауға әле булһа анyҡ ҡына яуап бирә алмайым. Ләкин шуға инанғанмын: йөкмәтке менән теләһә ниндәй уҡыусыны йәлеп итеп була. Баш ҡалалағы уҡыусыларыбыҙҙы ла йөкмәткеле, үҙенсәлекле баҫма менән генә яулап буласаҡ ине. Коллективым алдында шундай бурыс ҡуйылды ла инде. Шул уҡ ваҡытта зауыҡлы, фәһемле һүҙҙе баш ҡалала йәшәүсе зыялыларыбыҙ үҙҙәре әйтергә тейеш икәнлеген дә белә инек. Шулай тыуҙы баҫмабыҙҙағы иң төп рубрикалар - "Диалог", "Монолог", "Бәхәс ҡоро", "Фекер ҡоро".

Тәүҙән үк шул маҡсатты ла йөкмәп алдыҡ: "Киске Өфө" баш ҡала гәзите генә түгел, ә республика ауылдарында һәм ҡалаларындағы туған телдә уҡый белгән һәр кем яҡын итер баҫма булырға тейеш ине. Өфө үҙе лә бит өфөләр өсөн генә түгел, ә республиканың бар халҡы өсөн яҡын, үҙ ҡала. Өфө - Башҡортостан дәүләтенең "мейеһе", арҡа һөйәге. Яҙмышыбыҙ Өфөлә хәл ителә. Иртәме, һуңмы, ауылдарҙа йәшәүсе һәр ғаиләнең иғтибары улы, ҡыҙы, туғаны уҡыған, эшләгән баш ҡалаға төбәлә. Баш ҡалала булып яткан ваҡиғалар, ундағы көнитмеш, ығы-зығылар, шәхестәр, бигерәк тә уҡыу йорттары тураһында мәғлүмәттәр - барыһы ла яҡын республика халҡына. Тимәк, баш йортобоҙҙоң гәзите лә республика халҡы өсөн ят була алмай, тигән инаныуыбыҙҙы республика халҡы хупланы. Баш йорттоң башҡорт донъяһы тураһындағы хәбәрҙәребеҙҙе бөгөн "Киске Өфө" аша Баймаҡта ла, Әбйәлилдә лә, Хәйбуллала ла, Ғафуриҙа ла, Аҫҡында һәм Илештә лә - барлыҡ районларҙа ла уҡыйҙар.

Йөкмәткегә килгәндә, "Киске Өфө" тәүҙән үк һәр кемдең рухи таянысы булыуға дәғүә итте. Авторҙарыбыҙ алдына ла шундай маҡсат ҡуйылды: халҡыбыҙҙың йолаларын, тәрбиә алымдарын иҫкә төшөрәйек. Йәнәшәбеҙҙә генә йәшәп ятҡан матур ғаиләләр, матур кешеләр, матур өлгөләр, уларҙан бөркөлгән изгелек нуры тураһында яҙайыҡ. Ауыр замандың ауырлыҡтарынан сығыу юлын тапҡан, үҙ көсө менән мал, байлыҡ туплап, уны матур итеп тотона белгән, етеш тормош өлгөһө күрһәткәндәрҙе лә күтәрәйек - улар башҡаларға маяҡ булһын. Ғөмүмән, гәзитебеҙ тәүҙән үк шундай маҡсатты күҙҙә тотоп ижад ителә: ул һәр кемгә трибуна була ала, йәғни беҙҙең һөйләшеү, фекер алышыуҙарҙа һәр кем ҡатнаша, тәҡдим, кәңәш, хатта тәнҡит рәүешендә әйтелгән һүҙҙәрен еткерә ала. Уҡыусың зауҡы ниндәй икәнен белмәй, белешмәй, үҙ ауыҙынан ишетмәй тороп, уға нисек "Мә, уҡы!" тип һонмаҡ кәрәк гәзитеңде!

Һәр хәлдә, яҙыусы ла, журналист та үҙ уҡыусыһын тойорға, кемгә мөрәжәғәт иткәнен белергә тейештәр ул. Кемдер бөрәүҙән: "Мин шиғырҙарымды яҙғанда әсәйемде күҙ алдына килтерәм",- тигәне хәтерҙә. Ә мин, "Киске Өфө" тигән гәзитте ойоштор, ижад ит, тип ҡулыма тотторған саҡта тәбиғәте менән сабый, рухи аҙыҡты бар нәмәнән өҫтөн ҡуйған, әммә ошо яңы замандың зәңына, ҡатмарлы ҡанундарына яраҡлаша алмай, бер аҙ баҙап ҡалған кешеләрҙе күҙ алдыма килтерҙем. Беҙ ижад иткән баҫма уның "Артабан ни эшләргә?" тигән һәм башҡа бик күп һорауҙарына яуап та бирергә, рухын да күтәрергә, сәмләндерергә лә, таңныҡын да ҡандырырға тейеш ине. Нисек кенә булмаһын, Артур Миллер тигән бер аҡыллы кеше әйткән бурысты иңебеҙгә артмаҡлап алыуыбыҙ. Ул шулай тигән: "Нимә ул яҡшы гәзит? Ул милләттең үҙ-үҙе менән һөйләшеүен ойоштора алған гәзит". Беҙ ҙә шуға ынтылабыҙ. Беләбеҙ, был ынтылыш әле... 110 проценты менән атҡарылып та бөтмәйҙер. 110 процентҡа эшләү генә камиллыҡты тәьмин итә, ти бит уңышлы кешеләр. Артылырға ине шул камиллыҡҡа... Бәлки, беҙҙән һуң килгән быуын артылыр ул үргә. Ни генә тиһәң дә, беҙҙән һуң киләсәк быуын беҙҙән яҡшыраҡ буласаҡ, яҡшыраҡ йәшәйәсәк, яҡшыраҡ эшләйәсәк һәм... яҡшыраҡ гәзит сығарасаҡ. Шул быуындың быуынын нығытырға ярҙам итергә тейеш гәзитебеҙ һүҙе, шәхестәребеҙ аҡылы.

Әйткәндәй, "Беҙҙән һуң гәзит булыр тиһеңме ни, бынауындай прогресс заманында..." тип йылмайып ҡуйғаныбыҙҙыр әле, шулаймы? Бәлки, булыр. Ишеткәнегеҙ бармы: тегe замандарҙа әле, радио барлыҡҡа килгәс, гәзит журналистары, хәҙер инде беҙҙең гәзит кемгә кәрәгер икән, тип оло ҡайғыға ҡалған, ти. Шунда берәү: "Гәзит кешеләргә барыбер кәрәгәсәк, радио менән себендә һуғып үлтереп булмай бит", - тигән. Шуның кеүек, бәлки, ҡағыҙ битенә яҙылған аҡ һүҙ, хаҡ һүҙ йәшәүен дауам итер әле, тип өмөтләнәйек. Сөнки... Сөнки гәзиттәрҙә, китаптарҙа яҙылған һүҙгә мөкиббән китеп ышаныу йәшәй әле халҡыбыҙҙа. "Гәзиттә уҡымаһа, дәүләт метеорология институты прогнозына ла ышанмаған кешеләр була", тигән бит берәү. Ошо ышанысты аҡларға, ҡаҡшатмаҫҡа ине ул, тип йәшәй 12 йәшлек сабыйыбыҙ - "Киске Өфө" гәзите. Әлбиттә, уның үҙенең ышанысы ла аҡланһын ине - бынының инде һеҙҙең, уҡыусыларыбыҙҙың ҡулында. Нимәгә ишаралағанды яҡшы беләһегеҙ. Сөнки һеҙ - иң аҡыллыһы, иң аңлыһы, иң зауыҡлыһы. Рәхмәт һеҙгә шундай булғаныбыҙ өсөн.

Гөлфиә ЯНБАЕВА.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Президенты "2014 йылда Халыҡтар берҙәмлеге көнөн байрам итеү тураһында"ғы указға ҡул ҡуйҙы. Рөстәм Хәмитовтың ҡушыуы буйынса, байрам сараларын әҙерләү һәм үткәреү менән Мәғариф, Мәҙәниәт һәм Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлыҡтары район һәм ҡала хакимиәттәре менән берлектә шөғөлләнәсәк. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, 1, 2, 3 һәм 4 ноябрь республикала ял көндәре тип иҫәпләнә.

✓Рөстәм Хәмитов "Яңы 2015 йылды байрам итеү тураһында"ғы указға ҡул ҡуйҙы. Яңы йыл сараларын әҙерләү һәм үткәреү буйынса ойоштороу комитетын БР Хөкүмәте вице-премьеры Салауат Сәғитов етәкләне. Документка ярашлы, Президент шыршыһы 22 декабрҙә үтәсәк. Уға, гәҙәттәгесә, уҡыу алдынғылары, олимпиада һәм спорт ярыштары еңеүселәре, төрлө фестиваль лауреаттары, хеҙмәт бурысын үтәгәндә һәләк булған хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең балалары, республика төбәктәренән күп балалы һәм аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙән балалар саҡырыла. Улар өсөн "Салют" шифаханаһында өс көнлөк ял ойоштороласаҡ.

✓Мәскәүҙә "Рәсәй - Тажикстан: төбәк-ара хеҙмәттәшлек потенциалы" IV Парламент-ара форумдың пленар ултырышы сиктәрендә Рәсәй һәм Тажикстан төбәктәре араһында сауҙа-иҡтисади, ғилми-техник һәм гуманитар-мәҙәни хеҙмәттәшлек тураһында бер нисә килешеү төҙөлдө. Республика башлығы Рөстәм Хәмитовтың ҡушыуы буйынса Тажикстандың Хатлон өлкәһе Хөкүмәте менән хеҙмәттәшлек итеү тураһындағы килешеүгә ҡул ҡуйылды, тип хәбәр ителәр БР Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтендә.

✓Республика башлығы Рөстәм Хәмитов "Салауат Юлаев" хоккей клубын финанслау менән бәйле хәлгә аңлатма бирҙе. "Башҡортостан Республикаһында хоккей булды, бар һәм буласаҡ, - тине Президент. - Һәм "Салауат Юлаев" хоккей клубы шулай уҡ булды, бар һәм буласаҡ. Яҡынраҡ ҡына клубтың 50 йыллығын билдәләнек. Беҙҙең киләсәк быуын уның 100 йыллығын да, 200 йыллығын да билдәләйәсәк тип уйлайым". Башҡортостан Президенты был хәлде сәйәсәт менән бәйләмәскә һәм ошо тема менән файҙаланмаҫҡа саҡырҙы.

✓Өфөлә "Медицина-2014" XXIII халыҡ-ара махсуслаштырылған күргәҙмә эшләне. Унда Рәсәй медицина предприятиелары ғына түгел, ә АҠШ, Германия, Швейцария, Ҡытай тармаҡ фирмаларының вәкиллектәре - йәмғеһе 130-ҙан ашыу экспонент үҙ экспозицияларын тәҡдим итте.

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# ХАТТАР ЯҘҘЫМ...

## төшөрөр "тишек" тапманым

**Электрон бәйләнеш заманында хат яҙыу тигән нәмә лә онотолдо, бугай. Яҙма хәбәрләшеү рәсми ойошмалар һәм һәр төрлө ведомстволар эшмәкәрлеге өсөн генә хас функция булып ҡалды. Шулай тиһәм дә, бөтөн мәсьәләләрҙе лә телефон аша ғына хәл итеп булмай шул. Тормош булғас, теге йәки был ойошмаға йомош-юл төшөп кенә тора. Шылтыратып берәй мәсьәләне хәл итермен, тимә, "Яҙып ебәрегеҙ," тип кенә трубканы һалып ҡуялар.**



Ярай, яҙҙым хатты, тик бына уны ҡулыма тотоп, бер нисә квартал ҡыҙырып сығырға тура килде: элек урам һайын эленеп торған почта йәшниктәре зым-зыя юҡ булған! Сүп йәшнигенә ташлап китерҙәй булдым: ямғыр аҫтында күшегеп йөрөп, конвертым һыуланып бөттө. Алыҫыраҡ булһа ла, почта бүлексәһенә бармауыма үкендем. Сипайловоның 105-се элемтә бүлексәһенә бынан алда ғына барып, бер конверт һатып алыр өсөн һыу буйы сиратта тороуым иҫкә төшкәйне шул. Әйткәндәй, ошо бүлексәгә көндөң ҡайһы мәлендә килеп инһәң дә оҙон-оҙон сират, кисәге оператор ҡыҙыҡай урынында һәр саҡ яңыһы ултыра - белмәҫһең, әллә көн дә эштән китеп, көн дә яңылары килеп тора... Улары эштең айышына төшөнгәнсә, беҙгә сиратта "ҡыҙынырға" тура килә. Йорттарға көндәлек почта онотҡанда бер таратылыуына үҙегеҙ ҙә шаһиттыр.

Почта хеҙмәте элек-электән лайыҡлы абруй менән файҙаланып килде. Хәтерләйһегеҙҙер әле, ул саҡтарҙа гәзиттәрҙә, "ҡарлы-боҙло ямғырҙа ла, буранда ла почта ташый", тип, хат ташыусыларҙы нисек маҡтап яҙа инек. Һәм илебеҙ почтаһы лайыҡ ине бындай маҡтау һүҙҙәренә. Бөгөн иһә, һаман да шул "оптималләштереү" тигән афәт был өлкәне лә көрсөккә килтереп терәне, ахырыһы...

**Фирүзә ИШБИРҘИНА.**

ШАҢДАУ

# БАР ҺҮҘҘӘРҘЕ ЛӘ...

## тәржемә итеү кәрәкме?

**Телебеҙҙең сафлығы һағында тороусылар мине һәр саҡ һөҡландыра. Бына әле лә Рәхимә Мусинаның гәзитебеҙҙең 42-се һанында баҫылған "Бар һүҙҙәрҙе лә... тәржемә итеү кәрәкме?" исемле мәҡәләһен яратып уҡыным. Унда күтәрелгән мәсьәләгә ҡарата үҙ фекеремде лә белдерергә булдым.**

Башлыса сәйәсмәндәр сит ил һүҙҙәрен ҡулланырға ярата беҙҙең илдә. Бик белемле, белдекле булып күренергә тырышыуҙанмы был, әллә һәр кем аңламаһын, тигән маҡсаттанмы инде? Тағы ла шул элеккеләр иҫкә төшә: Юғары Совет съезынан ҡайтҡан бер депутат М. Горбачёвтың телмәрен тыңлап: "Ул шул хәтлем күпте белә, шундай аҡыллы, хатта ул һөйләгәндәрҙе бөтөнләй тиерлек аңлап булмай", - тип һөйләгәйне. Ә минең хәтеремдә М. Горбачев телмәрендә яңғыраған "консенсус" тигән һүҙ генә ҡалған...

Сит ил һүҙҙәрен күпләп ҡулланыу башҡорт телендә генә күҙәтелмәй, был мәсьәлә рус филологтарын да күптән борсой. Бер ваҡыт Антон Чеховҡа: "Һеҙҙең пьесаларығыҙҙы тамашасы аңламаҫ, ябайлаштырығыҙ", - тип әйтәләр икән. Ә ул: "Театрҙың бурысы - түбәнерәк кимәлгә төшөү түгел, ә тамашасыны юғарыраҡ кимәлгә күтәреү", - тип яуап биргән. Бында ла хаҡлыҡ бар, әлбиттә.

Сит телдәрҙән ингән һүҙҙәрҙе матур ғына итеп башҡортсаға ауҙарыуға, уларҙы гәрәп, фарсы телдәрендәге варианттары менән алмаштырыуға күптән өйрәнеп бөттөк инде. Сәйәсәт, сәйәсмән һүҙҙәре лә үҙ булып яңғырай хәҙер, "Бөрөхана" тигән тәржемә лә оҡшай. Ә шулай ҙа сама белеү кәрәктер. Күптән түгел үҙебеҙҙең республика баҫмаларының береһендә йыш ҡулланылған "флешмоб" һүҙенә иғтибар иттем. Нимәһе күңелде ҡырҙы: гәзит-журнал биттәрендә йыш ҡабатланған был һүҙҙең ҡыҫҡаса ғына аңлатмаһын тапманым. Был һүҙҙе балалар аңлайҙыр, тип, уларҙан һораштырҙым һәм "Әлләсе..." тигән генә яуап ишеттем. Шуға ла, редакция хеҙмәткәрҙәре бик "теҡә" булып китмәһендәр - йәйәләр эсенә генә булһа ла аңлатма яҙһындар инде ошондай телебеҙгә килеп ингән сит һүҙҙәргә. Юҡһа, баҫмаларҙы йәштәр уҡымай, ҡарттар аңламай булып сыға бит.

Күптән түгел телебеҙ һағында тороусы бер филолог: "Ҡәләм тотоп аҡ ҡағыҙға яҙыусылары һәм ул китаптарҙы, ул әҫәрҙәрҙе уҡып барыусылары булған халыҡтың теле генә киләсәктә һаҡланып ҡалыр", - тигән бик матур фекер әйтте. Мин дә килешәм был фекер менән. Әммә ул китаптарҙың, баҫмаларҙың йәштәргә - ҡыҙыҡлы, ололарға аңлайышлы булыуы мотлаҡ бит.

Ошо урында бер матур йәнһүрәт иҫкә төштө. Яңы йыл байрамында кескәйҙәр Ҡыш бабайҙан: "Ә һин йәй көнө беҙгә килерһеңме?" - тип һорай. Ҡыш бабай аптырап: "Нимә һуң ул йәй?" - тип ҡыҙыҡһына. Балалар түңәрәккә теҙелешеп, йәйҙең нимә икәнен йыр яҙғамында аңлаталар. Ә быларҙы тыңлап ултырған ҡарға: "Ҡартайып бөткән, үҙе йәйҙе лә белмәй", - тип, Ҡыш бабайҙан көлә. Минең дә "Нимә ул флешмоб?" тигән һорауыма кемдер көләр инде. Әммә... Үҙ фекеремде әйтергә ҡурҡып, "Яланғас король" әкиәтендәге хәлгә ҡалыуың да бар бит.

**Айгөл АХУНОВА.**

**Әйткәндәй, флешмоб инглиз теленән "гөлт итеп тоҡанған халыҡ төркөмө" тигәнде аңлата. Ул заманса коммуникациялар аша (интернет) алдан планлаштырып ойошторолған, аныҡ ҡағиҙәләргә һәм закондарға буйһоноусы кумәк акция. Уның девизы "Флешмоб - диндән, сәйәсәттән, иктисадтан тыш". Акция ваҡытында ҙур ғына халыҡ төркөмө ҡапыл ғына ниндәйҙер бер йәмәғәт урынына йыйыла һәм күпмелер ваҡыт арауығында үҙҙәре төҙөгән сценарий буйынса сығыш яһап, тиҙ генә тарала. Мәҫәлән, башҡорт йәштәре быйыл Өфөлә бер нисә тапҡыр башҡорт бейеүе буйынса флешмобтар үткәрҙе. Ошондай уҡ сараны ҡурайсы егеттәребеҙ ҙә ойошторҙо.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәпләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ТУПРАҠТАН АЙЫРЫЛМАЙЫҠ!

**Гүзәл СИТДИҠОВА, яҙыусы:** Һуңғы йылдарҙа ауылдарҙа мал-тыуар тотоусылар кәмей башлағайны. Ниңә ыҙалап мал аҙығы әҙерләргә, көтөү торорға, ҡышын ҡура таҙартырға - ана бит, кибеттә тауыҡ боттары, башҡа төрлө ите арзан ғына, колбасаһы, һөтө лә һатыла... Хаҡы сыҡмай... Шундайыраҡ фекерҙәр ишетелгәне. Көтмәгәндә Украина көрсөгө килеп сыҡты һәм беҙҙе бик ныҡ уйланырға мәжбүр итте. Етмәһә, сит илдән алып ҡайтылған йәшелсә-емештең, ризыҡтың сифаты бик түбән, антибиотиктар, гормондар "төйөп" тултырылған икәнлеге лә мәғлүм булды. Шуға ла Рәсәйгә әллә күпме сикләүҙәр индерелеүе ауыл халҡын артыҡ хафаға ла һалманы, хатта һөйөндөрөп ебәргәндәй булды. Шөкөр, бөтәбеҙ ҙә әҙергә-бәҙер, сит илдән ҡайтарылғанға һалышып, еңел генә йәшәп ятмай инек бит, әгәр шулай булһа, нишләр инек?

Бәхеткә күрә, беҙҙә ауыл кешеһе әлегә ерҙән айырылмаған, малдан яҙмаған, эш мәғәнәһен дә онотоп бөтмәгән. Бынан ике йыл элек бер телетапшырыуҙа: "Кем булып эшләһә лә, дәрәжәһе, белеме ниндәй булыуға ҡарамай, кеше ҡара эште белергә тейеш. Беҙҙең ил шундай - унда бер көрсөгө сығырға ғына тора", - тигәйнем. Ысынлап, шулай. Ниндәй генә заман, королош булмаһын, кем генә ил башында тормаһын, тамағыбыҙҙы ер һәм хеҙмәт туйҙырыр. Балаларыбыҙға ла ең һыҙғанып эшләп, тир түгеп, аҡса, мал табыуҙың мөһимлеген аңлатып үҫтерергә кәрәк. "Банк" тигән шиғырымда яҙғанымса: "Әллә ҡайҙан байлыҡ көтәһе юҡ, Иң ҡиммәт банк - тупраҡ һәм хеҙмәт". Йыл уңышһыҙ килгәндә лә, ерҙе буш итмәһәң, буш ҡул менән тороп ҡалмайһың.

Барыһы ла хәйерлегә булһын. Ауылдарыбыҙ терелеп китер, ауыл хеҙмәтсәненең эше тейешенсә баһалана башлар, тип өмөт итәм. Тупраҡтан айырылмайыҡ, туғандар. "Тупраҡ - беҙҙең анабыҙ, Беҙ тупраҡҡа балабыҙ... Тупраҡ беҙҙең атабыҙ, Беҙ тупраҡҡа ятабыҙ", тип яҙған Бабич. Эйе, тупраҡ - беҙҙең атабыҙ ҙа, әсәбеҙ ҙә, ул йәшәтә милләтте.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔"Өфө" халыҡ-ара аэропортында яңы терминалдың төҙөлөшө план буйынса бара - оптимистик прогноздарға ярашлы, уны 2014 йылдың аҙағында сафҡа индерәсәктәр. Яңы халыҡ-ара терминалының пассажирҙарҙы үткәреү һәләте сәғәтенә 800, йылына 1,3 миллион кеше буласаҡ. Халыҡ-ара линиялар терминалының дөйөм майҙаны 16 мең квадрат метрҙан ашыу тәшкил итәсәк. Бинала ике ҡат буласаҡ. Саммиттарҙы уҙғарғандан һуң аэродромды реконструкциялауҙың икенсе этабы башланасаҡ.

✔Ауыл хужалығы йәрминкәләре Өфөлә Яңы йыл каникулдарына тиклем дауам итәсәк. Был хаҡта аҙна һайын уҙғарылған оператив кәңәшмәлә ҡала мэры Ирек Ялалов хәбәр итте. Миҙгел йәрминкәләре Өфө халҡы өсөн яҡшы йолаға әйләнде. Элек йәрминкәләр ноябрҙең урталарында тамамлана торғайны. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, быйыл ауыл хужалығы йәрминкәләрен уҙғара башлағандан алып Башҡортостанда 6717 тонна картуф, 4274,3 тонна йәшелсә, 675,9 тонна бал һәм 1490,5 тонна ит һатылған.

✔Өфөлә электр транспортында юл йөрөү хаҡы артасаҡ. Трамвай һәм троллейбуста билет хаҡы элекке 12 һум урынына 15 һум торасаҡ. Электрон пластик картаһы менән түләгәндә юл хаҡы 12 һум (9 һум ине) тәшкил итәсәк. Пенсионерҙар, федераль һәм төбәк әһәмиәтендәге ташлама алыусылар өсөн социаль пластик карта буйынса йөрөү хаҡы 6 һум, студенттар өсөн - 8 һум, мәктәп уҡыусыһы өсөн 5 һум торасаҡ. Багаж хаҡы элекке 7 һум урынына 9 һум күләмендә билдәләнгән.

✔Хәйбулла районы Советы контракт буйынса Раил Ибраһимовты район хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләү тураһында ҡарар ҡабул итте. Ул 2014 йылдың сентябренән алып әлегә тиклем хакимиәт башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарғайны.

✔Бөрйән районының Иҫке Собханғол ауылындағы мәктәп ремонтланасаҡ һәм унда 120 урынлыҡ интернат төҙөйәсәктәр. Генераль подрядсыны билдәләүгә конкурс документтары дәүләт һатып алыуҙары сайтында баҫылған. Электрон аукцион 17 ноябрҙә уҙасаҡ. Заказсы - Бөрйән районы хакимиәте. Проект район ҡаҙнаһынан (шул иҫәптән республика бюджетынан бюджет-ара трансферттар иҫәбенә), йыл һайын БР Хөкүмәте билдәләгән бюджет йөкләмәләре лимиты сиктәрендә финансланасаҡ. Эштәрҙе 2016 йылдың августында тамамлау, объектты 15 декабрҙән файҙаланыуға тапшырыу планлаштырыла.

✓ *Мәскәүҙең Садовое кольцоһы буйлап махсус, башҡорт орнаменттары менән биҙәлгән мәғлүмәти троллейбус йөрөнө. Унда республиканың баш ҡала вуздарына уҡырға ингән беренсе курс студенттары түңәрәк буйлап экскурсия яһаны.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БАШҠОРТОСТАН - МӘСКӘҮҘӘ



**Уҙған йәкшәмбелә Мәскәүҙә "Мәскәү - дөйөм йортобыҙ" Мәскәү төбәк-ара яҡташтар ойошмаларының фестивале сиктәрендә Башҡортостан Республикаһы көнө уҙҙы. Сараны Рәсәй Федерацияһы Президенты ҡарамағындағы Башҡортостан Республикаһының Тулы хоҡуҡлы вәкиллеге һәм "Башҡортостан яҡташтары" Төбәк йәмәғәт ойошмаһы ойоштороҙо. Байрам Мәскәү Хөкүмәте булышлығында уҙҙы.**

Республика көнө баш ҡалала икенсе тапҡыр киң билдәләнде. Тәүге тапҡыр ул былтыр Бөтә Рәсәй күргәҙмә үҙәгендә уҙғайны һәм "Мәскәү - дөйөм йортобыҙ" фестиваленең башланыуына арналғайны, уның сиктәрендә баш ҡала хөкүмәте йыл һайын һәр төбәк яҡташтар ойошмаһына йылына бер тапҡыр мәҙәни программа үткәреү өсөн Бөтә Рәсәй күргәҙмә үҙәгенең 62-се павильонын бирә. Мәскәү фестивале ойоштороусыларының фекере буйынса, нәҡ Башҡортостандың программаһы инде икенсе йыл бик күп ҡатнашыусыны йыя һәм сағыу, бай йөкмәткеле уҙа.

Республика көнө алдынан Мәскәүҙең Садовое кольцоһы буйлап махсус, башҡорт орнаменттары менән биҙәлгән мәғлүмәти троллейбус йөрөнө. Унда республиканың быйыл баш ҡала вуздарына уҡырға ингән беренсе курс студенттары түңәрәк буйлап экскурсия яһаны. "Башкорт" троллейбусынан Мәскәүҙә Республика көнөн үткәреү тураһында иғлан яңғыраны.

Байрам "Башҡортостан" киностудияһының башҡорт телендәге ҡыҫҡа метражлы һәм анимация фильмдарын бушлай күрһәтеү менән башланды. Республика көнөн рәсми рәүештә "Башҡортостан яҡташтары" Төбәк йәмәғәт ойошмаһы рәйесе, Башҡортостандан Федерация Советы ағзаһы Рафаил Зинуров һәм РФ Президенты ҡарамағындағы Башҡортостан Республикаһының Тулы хоҡуҡлы вәкиле вазифаһын башҡарыусы Олег Матыцин асты. Артабанғы программа туғыҙ сәғәт дауамында "нон-стоп" режимында уҙҙы. Башҡорт дәүләт филармонияһы артистарының сығыштарын Мәскәүҙең һәүәскәр башҡорт коллективтары сығыштары, республика тормошон төрлө яҡтан күрһәтеүсе классик этюдтар, презентациялар алмаштырҙы. Бында шулай уҡ сувенирҙар, бал һәм милли биҙәүестәр йәрминкәләре, башҡорт телендә йәштәр КВН-ы, милли дискотека ойошторолдо.

# АҠМУЛЛА УҠЫУҘАРЫ

**2015 йылда Аҡмулла уҡыуҙарын ребрендинг көтә - улар Халыҡ-ара Евразия гуманистик форумына үҙгәртеп ҡоролаcаҡ. Форум концепцияһы Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы Университетының юғары уҡыу йорттары-уҙаҡташтары ғалимдары, вәкилдәре өсөн асыҡ майҙансыҡ формаһында саралар комплексын үткәреүҙе күҙ уңында тота. Үҙгәрештәр ҡатнашыусыларҙың географияһы киңәйеү, Башҡорт дәүләт педагогия университетының ШОС Университеты составына инеү һәм халыҡ-ара хеҙмәттәшлек нигеҙендә барлыҡҡа килгән бик күп бәйләнештәр менән бәйле.**

2014 йылда Халыҡ-ара Мифтахетдин Аҡмулла көндәре 15-19 декабрҙә уҙасаҡ. Улар "Төркиәт һәм шәрҡиәт өлкәһендә заманса тикшеренеүҙәр контексында мәғрифәтселек традициялары", "Сәйәси-мәҙәни киңлектә филологик белем", "Хәҙерге заман мәҙәниәтендә педагогик һәм гуманистик аспекттар", "Мәғрифәтселек һәм милли һынлы, биҙәү-кулланма сәнғәте", "Педагогик фәндәр һәм заманса белем биреү" йүнәлештәре буйынса үтәсәк. Конференция һөҙөмтәһе буйынса мәҡәләләр йыйынтығының матбуғат һәм электрон варианттарын нәшер итеү күҙаллана.

Аҡмулла уҡыуҙары республикала мөһим ваҡиға булып тора. Йәмғиәттең һәм мәғариф системаһының демократик үҙгәреү юлында Башҡортостан, Рәсәй, БДБ һәм ШОС илдәренең прогрессив педагогик йәмәғәтселеген бергә туплап нығытыу идеяһында нигеҙләнгән ғилми форум күпселек ғалимдарҙың иғтибарын йәлеп итә. Йыл һайын Халыҡ-ара Аҡмулла уҡыуҙарында 1000-дән ашыу кеше ҡатнаша, улар иҫәбендә РФ төрлө ҡалаларынан һәм төбәктәренән, яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙән ғалимдар була. Ул мәғрифәтсенең ижади мираҫына һәм тотош мәғариф проблемаларына ғилми-педагогик йәмәғәтселегенең ҙур ҡыҙыҡһыныуын дәлилләй.

# БЕҘҘЕКЕЛӘР ҘӘ ҺЫНАТМАЙ!

**Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Матбуғат һәм киң коммуникациялар буйынса федераль агентлыҡ (Роспечать) етәксеһе Михаил Сеславинский менән осрашты. Өфөгә ведомство башлығы киң мәғлүмәт сараларында патриотик тәрбиә темаһын иң яҡшы яҡтыртыуға XIII "Рәсәй патриоты - 2014" бөтә Рәсәй конкурсы еңеүселәрен бүләкләү тантанаһында ҡатнашыу өсөн килгәйне. Осрашыу барышында яҡтар конкурс һөҙөмтәләрен, шулай уҡ республикала алдағы Әҙәбиәт йылын үткәреү менән бәйле мәсьәләләрҙе тикшерҙе.**

Матбуғат һәм киң коммуникациялар буйынса федераль агентлыҡ башлығының һөйләүе буйынса, "Рәсәй патриоты" конкурсында ҡатнашыу буйынса Башҡортостан Республикаһы федераль киң мәғлүмәт сараларынан һуң лидер булып тора. Быйыл финалға 32 киң мәғлүмәт сараһы сыҡты.

- Республика менән хеҙмәттәшлек саралар үҙғарыу йүнәлеше буйынса ғына бармай. Телевидение һәм республика гәзиттәренең социаль әһәмиәтле программаларына өҫтәмә ярҙам итәбеҙ. 2014 йылдың 1 сентябренә ҡарата 11 матбуғат сараһы өсөн 2,8 миллион һумдан ашыу дәүләт субсидияһы бүленгән, уларҙың 10-һы милли телдәрҙә сыға. Ул, тәү сиратта, балалар баҫмалары - "Аманат", "Аҡбуҙат" һәм башҡалар, шулай уҡ өлкән быуын вәкилдәре өсөн "Ветеран Башкортостана" гәзите, - тип хәбәр итте Михаил Сеславинский.

"Киң мәғлүмәт сараларында патриотик тәрбиә темаһын иң яҡшы яҡтыртыуға "Рәсәй патриоты" конкурсы 2003 йылдан алып уҙғарыла. Быйыл конкурстың федераль этабында Рәсәй Федерацияһының 69 субъектынан 525 киң мәғлүмәт сараһынан 3322 эш ҡатнашҡан. Башҡортостандың һигеҙ киң мәғлүмәт сараһы "Рәсәй патриоты" бөтә Рәсәй конкурсы еңеүселәре булды. Улар араһында Учалы ҡала гәзите баш мөхәррире Фәнисә Таһирова, "Юлдаш" мәғлүмәти йыр-моң каналынан "Мәңгелек хәтер" проекты етәксеһе Тәнзилә Үлмәсбаева, "Телецентр" киске каналдың "Алыҫ һәм яҡын Украина" ток-шоуы өсөн Азамат Әлмөхәмәтов, "Комсомольская правда" журналисы Евгений Соколов, "Молодежная газета" редакцияһынан Алексей Огородников һәм Андрей Королев бар.

# ӘҘЕРЛЕК ГРАФИККА ЯРАШЛЫ БАРА

**Өфөлә Рәсәй Президентының ярҙамсыһы Юрий Ушаков етәкселегендә 2015 йылда ШОС һәм БРИКС илдәре саммитын уҙғарыуҙы әҙерләү һәм рәйеслек итеү буйынса федераль Ойоштороу комитетының эшсе төркөмө тикшереү уҙғарҙы. Улар Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов оҙатыуында сараны үткәреүҙә ҡатнашлығы булған инфраструктура объекттары менән танышты.**

"Өфө" Халыҡ-ара аэропортында халыҡ-ара терминал төҙөү тамамлана, периметр буйынса ҡоймаларҙы реконструкциялау һәм аэродромдағы эштәр ҙә аҙағына яҡынлаша. Киләһе йылдың февралендә аэропорт файҙаланыуға тапшырыласаҡ.

Эшсе төркөм вәкилдәре артабан ҡунаҡтар йәшәйәсәк ҡунаҡханаларҙың төҙөлөшө менән танышты. Шулай уҡ улар БРИКС саммитында ҡатнашыусылар хөрмәтенә уҙғарыласаҡ рәсми ҡабул итеү һәм концерт планлаштырылған Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры бинаһында булды. Бында ла эш күләме тулыһынса тиерлек башҡарылған.

ШОС һәм БРИКС илдәре саммитының төп саралары уҙғарыласаҡ Конгресс-холл бинаһында ла ремонт эштәре тамамланыу алдында. Ғөмүмән, барлыҡ объекттарҙа ла эш раҫланған графикка ярашлы бара. Дөйөм алғанда, Рәсәй Президенты Хакимиәте вәкилдәре объекттарҙың әҙерлек кимәленең күҙаллауҙарға тап килеүен һәм ыңғай тәьҫораттар ҡалдырыуын, артабан да графикты теүәл үтәү һәм эш барышын ҡәтғи контролдә тотоу кәрәклеген билдәләне.

# МИЛЛИОН ТОРЛАҠ

**Баш ҡалала 2017 йылға торлаҡ төҙөү күләмен йылына миллион квадрат метрға еткереү планлаштырыла. Һуңғы йылдарҙағы торлаҡ төҙөлөшө темпының йылдам һәм тотороҡло артыуы бындай фаразлауға нигеҙ бирә лә инде.**

Былтыр, мәсәлән, 817 мең квадрат метр торлаҡ файҙаланыуға тапшырылған, был 2012 йыл менән сағыштырғанда 6 процентҡа күберәк. Быйыл был һандың 880 мең квадрат метрға етеүе күҙаллана. Әлеге ваҡытта Өфө торлаҡ төҙөү буйынса Новосибирск, Дондағы Ростов, Силәбе, Екатеринбургтан ҡала бишенсе урында килә.

Торлаҡ төҙөү өсөн перспективалы майҙансыҡтар ғәмәлдәге генераль планды иҫәпкә алып билдәләнгән. 2007 йылдан алып октябргә тиклем 116 проект эшләнгән һәм раҫланған. Улар ҡаланың 70 процент территорияһын алып тора. Шуларҙың 100-ө - инвесторҙар заказы буйынса. Федераль, республика һәм ҡала программалары буйынса социаль торлаҡ төҙөү йүнәлеше өҫтөнлөклө булып ҡала.

**"Башинформ".**

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостанда 2 миллион 162,3 мең ҡатын-ҡыҙ һәм 1 миллион 907,4 мең ир кеше йәшәй, тип иҫәпләгән Башҡортостанстат. Төрлө йәш категорияларында заттарҙың нисбәте ныҡ ҡына айырыла. 20 йәшкә тиклем, шулай уҡ 25-34 йәштәрҙә ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙарҙан иҫәп буйынса өҫтөнлөк итә. 35-тән һуң ҡатын-ҡыҙҙар "лидерлыҡ итә" башлай, заттарҙың иҫәп айырмаһы халыҡтың олоғайыуы буйынса үҫә. 35-39 йәштәр категорияһында 138,3 мең ҡатын-ҡыҙға 130,4 мең ир кеше тура килә. 55-59 йәштәргә - 163,7 мең ҡатын-ҡыҙға 134,8 мең ир. 60 йәштән алып ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәрҙән 1,8 тапҡырға күберәк.

✓Киләһе йылдың апрелендә башҡорт телендәге Википедия бүлегенә 10 йыл тула. Ошо уңайҙан "Викимедиа РУ" - Рәсәй халыҡтары телдәрендә бер төркөм ғилми һәм мәғариф проекттарына ярҙам итеүсе ойошма "Вики-Һабантуй-2015" юбилей саралары комплексын планлаштыра. Төп сара - бөтәһе өсөн ирекле һәм асыҡ конференция (Йыйын) 2015 йылдың апрелендә Өфөлә уҙасаҡ. Рәсәй халыҡтары телдәрендә Википедияның 35 бүлек һәм өҫтәмә википроект мөхәррирҙәренең килеүе көтөлә. Шулай уҡ сит ил викимедияны, атап әйткәндә, төрки телле Википедия вәкилдәренең ҡатнашыуы ихтимал.

✓Йылайырҙа Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, республика Хөкүмәте Аппараты етәксеһе Илшат Тажетдинов һәм республика урман хужалығы министры Динир Әхмәтйәнов рәйеслегендә Урал аръяғының урман сәнәғәтен үҫтереү мәсьәләләре буйынса күсмә кәңәшмә үтте. Унда муниципаль район башлыҡтары һәм инвесторҙар ҡатнашты.

✓Өфө Рәсәйҙең йөҙ эре ҡалаһы интеграль рейтингында һигеҙенсе урынға күтәрелде. Был рейтингты 2013 йылдың һөҙөмтәләре буйынса "Урбаника" территориаль планлаштырыу институты төҙөй. Тикшеренеүҙең маҡсаты - эре ҡалаларҙағы тормоштоң "хаҡы" менән "сифаты" күрһәткестәренең нисбәтен сағыштырыу. Мәскәү - 25-се, Санкт-Петербург - 20-се, Силәбе 39-сы урында. Лидер итеп Сургут ҡалаһы танылған. Был рейтинг юғары тормош кимәле һәм ҡала мөхитенең сифаты буйынса билдәләнә. Баш ҡалала йәшәүсе һәр кеше өсөн эшләү өсөн дә, ял итеү, спорт менән шөғөлләнеү, күңел асыу өсөн дә бар шарттар булдырылған. Рейтингта яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшеү - алып барылған эшмәкәрлектең дөрөҫлөгөн тағы бер тапҡыр раҫлай.

***Было һөйөнөсө менән уртаҡлашыуға, иренең һөмһөрө ҡойола: "Нимәгә ул беҙгә тағы бер бала? Үҙемдең кәмһенеп үҫеүем дә еткән. Минең улымдың бөтә нәмәһе лә буласаҡ. Ул бер нәмәгә лә мохтаж йәшәмәйәсәк!" - ти ир.***



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# АТҺЫҘ БАШҠОРТ БУЛМАЙ

**Башҡорт мифологияһында ат менән кеше образы бер-береһен тулыландырып, бер бөтөн булараҡ һүрәтләнә. Халыҡ ижады әҫәрҙәрендә ваҡиғалар герой эргәһендә генә түгел, уның аты тирәләй ҙә ҡуйыра. Ҡайһы берҙә уның үҙен нисек тотоуынан, әүҙемлегенән геройҙың үҙ маҡсатына өлгәшә алыуы йәки алмауы ла тора.**

Боронғо башҡорттар, төҫөнә ҡарамайынса, бөтөн аттарҙы ла изгеләштергән. Һуңғараҡ ваҡытҡа ҡараған фольклорҙа һәм этнографияла тылсымлы ҡанатлы атҡа - Аҡбуҙатҡа иғтибар күберәк бүленеүен иһә шулай аңлатырға мөмкин. Халҡыбыҙҙың рухи тамырҙарын эҙләп, һәр кеше иң тәүҙә "Урал батыр" менән "Аҡбуҙат" эпостарына мөрәжәғәт итә, ә Аҡбуҙат был әҫәрҙәрҙә төп герой булып тора.

Башҡорт халыҡ ижадындағы мифик ат образдарын шартлы рәүештә өс төркөмгә бүлеп була. Беренсенән, күктә, һыу аҫтында һәм мәмерйәлә (ер аҫтында) йәшәүсе аҡбуҙаттар, күк һараттары (һары ат), тураттар (туры ат) һәм күгаттар (күк төҫтәге ат); күктә, һыу һәм ер аҫтында йәшәүсе ҡараттар (ҡара ат). Икенсе төркөмгә - ҡанатлы толпарҙар, ә өсөнсө төркөмгә икенсе йән эйәһенә әүерелә алған аттар ҡарай. Әкиәти был аттарҙың барыһы ла кеше аҡылы һәм психикаһына эйә, улар һөйләшә белә, йәғни, тотемик идеологияға хас сифаттар менән биҙәлгән. Башлыса эпостарҙа телгә алынған, тәүге төркөмгә ҡараған аттар араһында Аҡбуҙат төп ат булып тора. Ул "Урал батыр", "Аҡбуҙат", "Заятүләк менән Һыуһылыу", "Иҙеүкәй менән Мораҙым" кеүек эпик әҫәрҙәрҙә, әкиәттәрҙә, ҡайһы бер легенда менән риүәйәттәрҙә осрай. Аҡбуҙат - йәшәү көсө, яҡтылыҡ, йылы сығанағы Ҡояштың аты, йәғни ул көндөҙ Ер шарын яҡтыртып тороусының кәүҙәләнеше. Ул күктә тыуған һәм шунда яҡты йондоҙ булып йәшәй. "Урал батыр" эпосында Аҡбуҙат утта янмаҫ, һыуҙа батмаҫ итеп һүрәтләнә. Урал батырға Аҡбуҙатты Һомай бүләк итә. Ул герой менеп йөрөгән ябай ат түгел. Аҡбуҙат яуыз көстәргә ҡаршы көрәшеүсе айырым герой булып тора.

Тағы бер космик ат Һарат (Һарысай) эпик әҫәрҙәрҙә әллә ни ҡулланылмай. Әммә ул да Аҡбуҙатта булған сифаттарға эйә. Ул да күктә тыуған һәм Айҙы кәүҙәләндереүсе булып тора. Ай үҙенең нурҙан туҡылған атын үҙенең ҡыҙы Айһылыуға, ә ул үҙенең улы Һаҡмарға бүләк итә. Аҡбуҙат менән Һарат, бер легенда буйынса, күккә күтәрелеп, әле лә шунда йәшәй. Кесе Етегән йондоҙлоғононоң йондоҙҙарына әүерелгән улар. Башҡорттар был йондоҙҙарҙы Буҙат менән Һарат тип атай. Улар алтын сылбырҙар менән Тимер ҡаҙыҡҡа бәйләнгән. Оло Етегән - ете бүре йәки ете дейеүҙән торған йондоҙлоҡ, улар быуаттар буйына Буҙат менән Һаратты тоторға тырышып, Тимер ҡаҙыҡ буйлап уларҙы баҫтыра. Таң яҡтырыу менән бүреләр ҙә, аттар ҙа юғала. Ҡараңғы төшөү менән был мәңгелек әйләнеш тағы ла ҡабатлана. Бүреләр аттарҙы тота алһын өсөн Тимер ҡаҙыҡтың емерелеүе йәки сереүе кәрәк, шул саҡта күктә бүреләр ҙә, аттар ҙа, ә ерҙә тормош юҡҡа сығасаҡ. Етегән йондоҙ - ете айғыр, әгәр ҙә уны ете тапҡыр әйләнһәң, һауап була тигән ышаныу ҙа бар.

**Ф. Илембәтов, А. Илембәтова.**
**"Башҡорт мифтары һәм йолаларында хайуандар культы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

УЙҘАРЫМДАН УЙЫЛАМ

**"Киске Өфө" гәзитендә, "Шоңҡар" журналында Илдар Ғәбитовтың күп балалыҡты яҡлап, бер-ике бала табыусы ҡатындар баҡсаһына таш ырғытып яҙған мәҡәләһен уҡығандан һуң үҙемдең фекерҙәрем менән уртаҡлашырға булдым.**

# БЕР БАЛА МЕНӘН СИКЛӘНЕҮ...

## инаныумы, әллә яҙмыш ҡушыуымы?



Был мәҡәләләрҙе әхирәттәрем дә уҡыған булып сыҡты. Авторҙың эскән, балаларын йүнләп баҡмаған, әммә күп бала тапҡан әсәләргә миҙал биреү яҡлы булыуы беҙҙең арала бәхәс тыуҙырҙы. Эйе, бер яҡтан ҡараһаң, тимер киҫәге йәл түгел кеүек. Әммә миҙалдың исеме "Әсәлек даны" тип атала бит әле. Нимәһе менән данлы был әсәләр? Балалары мәктәптән ҡайтыуға бер ҡабырлыҡ икмәк булмауы, уларҙың кеше араһында кәмһенеп, иҫке-моҫҡола йөрөүе, иҫерек әсәйҙе төрлө күңел асыу урындарынан эҙләп алып ҡайтыуы... Балаларын бына ошондай тормошта йәшәткән әсәләр лайыҡлымы икән һуң ундай миҙалға, данға? Мин быларҙы ҡайҙандыр ишетеп, уҡып белгәндән яҙмайым, төрлө рейдтар мәлендә үҙем күргәндәрҙән, шул балалар өсөн йөрәгем әрнеп, асырғаныуҙан яҙам. Әле миҙал биреүгә бәйле талаптар, ҡағиҙәләр рәсмиләштерелде, әсәләр социаль ойошмалар тарафынан тикшереү үткәндән һуң ғына "Әсәлек даны" миҙалына тәҡдим ителә. Бәлки, был алым шундай әсәләрҙе бер аҙ аҡылға ултыртыр, үҙҙәрен ҡулға алырға ярҙам итер? Был турала үҙ фекерен белдереүселәр күп булды, шуға артыҡ туҡталып тормайым.

Илдар Ғәбитовтың "бер-ике бала табыу менән сикләнгән", "берәүҙән артыҡ бала табырға теләмәгән" ҡатындарға ғәйеп ташлауы ла төрлө бәхәскә урын ҡалдыра. Эйе, ысынлап та, карьера, тип, бала табыуҙан баш тартҡан, бер-ике бала менән сикләнгән йәки бөтөнләй бала яратмаған ҡатындар ҙа бар. Әммә ҡатын-ҡыҙҙар барыбер ҙә күберәк балаға әсә булырға теләй, тик тормош, йәшәйеш үҙенсә хәл итә. Мәҫәлән, минең таныштарым араһында ла күпселек башлыса ике бала тәрбиәләй. Бына шулар миҫалында ниңә бөтә ҡатындарҙың да өсәр, дүртәр, бишәр бала үҫтермәүенең сәбәптәрен яҙып үтмәксемен.

Беренсе танышым яңғыҙы бер ҡыҙ үҫтерә. Тормошҡа сығып, оҙаҡ йәшәй алмаған. Эсеп ҡаңғыртҡан, әленән-әле ыҙғыш сығарып, ҡул күтәреүгә тиклем барып еткән ирҙең үҙен генә түгел, балаһын да зәғиф итеп ҡуйыуынан ҡасып, айырылып ҡайтып киткән. Ҡыҙы бер аҙ ҙурайғас, "Бер бала менән ҡалмайым әле" тип, тағы тормошҡа сыҡҡан. Был ире баштан уҡ уның ҡыҙын һөйһөнмәгән, уртаҡ бала табырға рөхсәт итмәгән, "Минең улым бар, миңә башҡа бала кәрәкмәй" тигән фекеренән ҡайтмаған. Бына ошо сәбәпнеҡлы ғаилә ҡороуға ҡамасаулағандыр, моғайын, уныһы менән дә айырылышты. Өсөнсөгә кейәүгә сыҡҡанында иһә ул ҡатынға 45 йәш тулып килә ине инде. Был ире менән матур ғына йәшәп ята, әммә бик теләһә лә балаға уҙа алманы...

Икенсе танышым кейәүгә сыҡҡас, ҡыҙ бала таба. Ҡыҙҙары бер аҙ үҫеп, мәктәпкә барыу йәшенә яҡынлағас, икенсеһен табырға ниәт итәләр. Әммә нисек кенә теләһә лә, ҡатын ауырға ҡала алмай. Дауаханаларҙа ятып, әбейҙәргә имләтергә лә йөрөп ҡарай. Йыл артынан йылдар үтә, һөҙөмтә юҡ. Шул саҡ табиптар иренә лә тикшерелеп ҡарарға кәңәш итә. Сәбәп ирҙә булып сыға, табиптарға йөрөп, ҡиммәтле дауаланыуҙар үткәндән һуң, көтөп алған улдары тыуа. Был ғаилә бик матур, етеш йәшәй. Хоҙай биргән ошо бала өсөн рәхмәтле улар, "Әгәр ҙә өсөнсөгә ауырға ҡалһам, был үҙе бер мөғжизә буласаҡ", ти был танышым. Бына шулай, ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙың баланы нисек һорап-ялбарып табыуын, ниндәй юлдар аша сабый һөйөү бәхетенә өлгәшеүен аңлай алырмы икән бала табып та, уларҙы матур итеп баҡмаған бәғзе бер әсәйҙәр?..

Өсөнсө танышымдың да балалары икәү. Ике малай. Улары хәҙер ҙурайып бөттө инде. Ҡатын ҡырҡҡа яҡынлай. "Их, тағы бер бала табыр инем!" ти ҙә ул, ире эсә. Ҡайһы берҙә көн менән төндө лә айырмай. Ул ҡатындың һәм малайҙарҙың мәңге иҫерек атайҙан күргән ыҙаларын үҙҙәре генә беләләр... "Айырылыр инем, урамда асарбаҡ булып йөрөйәсәк. Балаларымдың атаһы бит", тип, эскән ирен төрлөсә хәстәрләй, айнытырға тырышып, ниҙәр генә ҡылмай был ҡатын. Әммә айыҡ тормош иң күп тигәндә бер ай дауам итеүе ихтимал...

Дүртенсе танышымдың балаһы берәү генә. Ире күп балалы ғаиләнән. Улдары бер аҙ ҙурайыуға, ҡатын икенсегә ауырға ҡала. Был һөйөнөсө менән уртаҡлашыуға, иренең һөмһөрө ҡойола: "Нимәгә ул беҙгә тағы бер бала? Үҙемдең етешһеҙ тормошта, кәмһенеп үҫеүем дә еткән. Минең улымдың бөтә нәмәһе лә буласаҡ. Ул бер нәмәгә лә мохтаж йәшәмәйәсәк!" - ти ир. Хәйер, бындай сәйәсәтте ул алдан уҡ алып барған була. Әммә ҡатыны, ауырлы булыуымды белһә, ирем йомшарыр, тип өмөтләнә. Өмөтө аҡланмай, икенсегә бала табыуға бәйле өйҙә ғауға сыға. Ире: "Ярай, торараҡ, улыбыҙ мәктәпкә барғас табырһың, беҙ йәш бит әле", тип, ҡатынын абортҡа барырға күндерә. Бына шул аборттан һуң ҡатынға, икенсегә балаң булмаясаҡ, тигән диагноз ҡуялар. Ире менән дә айырылышып ҡуйҙы. Икенсегә тормошҡа сығып та ҡараны, әммә башҡаса бәпәй таба алманы. Хәҙер: "Йәшлек менән шул алйоттоң өгөтөнә бирелеп, абортҡа барыуыма үкенәм, икәүһен дә үҫтерер инем әле", - ти, ләкин эш үткән...

Бишенсе танышым икенсе балаһын тапҡан саҡта, ҡан баҫымы күтәрелеп китеп, бик ауыр хәлдә ҡала. Табиптар ҡатындың һәм баланың ғүмерен ҡотҡарыу өсөн сәғәттәр дауамында көрәшә, әммә сабыйҙы ҡотҡарып алып ҡала алмайҙар. Аналыҡ ҡанһырауҙан туҡтамағас, операция яһап, шул ағзаһын алырға мәжбүр булалар... Бына ошондай хәлдә ҡалған ҡатын-ҡыҙға: "Нишләп бер бала менән генә сикләнеп ҡалдың? Бер бала - бала түгел инде ул..." тип әйтеү дөрөҫ буламы? Ундай хәлдә ҡалыусы, көтөлмәгән хәлдәр арҡаһында бала табыу ағзаһынан яҙыусы ҡатын-ҡыҙ йөҙәр генә түгел, меңәр бит...

Үҙем дә, хәлемдән килһә, өсөнсөһөн, дүртенсеһен, хатта бишенсеһен дә табыр инем. Әммә яҙмыштан уҙмыш юҡ, бик теләһәм дә, таба алмайым. Шулай ҙа үкенмәйем, миңә мең ғазаптар аша әсәлек бәхете бүләк иткәне өсөн Хоҙайыма мең рәхмәтле булып йәшәйем. Ике балам - ике ҡанатым, улар минең тормошомдоң мәғәнәһе, йыуанысым да, ҡыуанысым да...

Бына шулай, бер йәки ике бала менән сикләнеп ҡалған ҡатындарҙы бала табырға, бағырға теләмәүҙә ғәйепләр алдынан автор аҙ ғына булһа ла ошолар хаҡында ла уйланһын ине, тип яҙҙым был юлдарҙы. Бәлки, минең фекерҙәрҙе дауам итеп, тағы кемдер үҙ яҙғандарын юллар гәзиткә?

**Зилә НОҒОМАНОВА.**
**Баймаҡ ҡалаһы.**

✓ ***Исем ҡушыу йолаһын малай өс йәшкә еткәнгә тиклем сөннәтләү йолаһы тулыландырып тора. М. Байышев һүҙҙәренсә, был эш менән махсус кешеләр - бабалар, сөннәтселәр шөғөлләнгән.***



*ҠУЛЪЯҘМАЛАРҺӨЙЛӘЙ*

# "АРТЫҠ ЕР"

**1912 йылда Силәбелә сыҡҡан "Голос Приуралья" гәзитендә баҫылған, авторы билдәһеҙ бер мәҡәлә "Артыҡ ер" тип атала. XIX быуаттың икенсе яртыһы - XX быуат башында башҡорттарҙың иҡтисади хәле насарая, халыҡтың күп өлөшө бөлгөнлөккә төшә. Быға тышҡы сәбәптәр - урмандарҙы, ерҙәрҙе ҡаҙналаштырыу, алдау юлдары менән тартып алыу ғына түгел, эске сәбәптәр ҙә - башҡорттарҙың үҙҙәренең аҫаба ерҙәрен түбән хаҡҡа һата башлауҙары булышлыҡ итә. "Артыҡ ер" мәҡәләһе - ошо хаҡта. Башҡорттар данлы тарихлы милләт, әммә был мәҡәләләге фәһем, ғибрәт алырлыҡ мәғлүмәттәрҙе лә беҙ белергә тейешбеҙҙер. Бөгөнгө көндә алдыбыҙға ер менән бәйле ҡайһы бер сетерекле мәсьәләләр йәнә килеп баҫҡанда, был мәҡәләне уҡып сығыу фәһемле булыр, моғайын.**



"Башҡорттар үҙ тәбиғәт байлыҡтарының мәнфәғәтен ҡуллана белмәй. Быға инаныу өсөн, уларҙың үткәнен һәм бөгөнгөһөн белгән ололарҙы тыңлау ҙа етә. Башҡорттар әлеге ваҡытта йәшәгән бөтөн ерҙәрҙә лә (Силәбе районы территорияһы хаҡында һүҙ бара) элек үтеп булмаҫлыҡ ҡуйы урмандар булған. Ниндәйҙер йөҙ йыл элек был урмандар, ер йотҡан кеүек, ҡапыл юҡҡа сыға. Ул урмандар бары өлкәндәрҙең хәтерендә генә ҡалған. Хәйер, улар хаҡында риүәйәттәрҙә лә һөйләнелә. Шуларҙың береһендә Ағаскүл тураһында бәйән ителә. Күл урынында ҡасандыр ҡуйы урман булған. Әммә бер ваҡыт урман ҡурҡыныс тауыштар сығарып, ергә ҡолай башлай, ә уның урынында һыу барлыҡҡа килә. Урман ауғанда, ер аҫтынан ҡот осҡос шау ҙа ишетелә. Ошо мәлдә төнгө ялға туҡтаған кешеләр көскә ҡасып ҡотола. Шунан алып урман урынына киң күл йәйелә. Әйткәндәй, башҡорттар бөгөн дә күл төбөнән йыуан ағастар сығарып, уларҙан ныҡлы йорттар төҙөйҙәр... Ошоноң кеүек риүәйәттәр башҡа күлдәр, мәҫәлән, Ҡарағайкүл хаҡында ла бар. Бындай күлдәрҙе күп ауылдар янында осратырға була.

Күлдәрҙең күп булыуы арҡаһында бындағы һауа торошо, күрше башҡорт улыстарына ҡарағанда, йомшағыраҡ һәм дымлыраҡ. Әммә тәбиғәт бер төрлө, ул урыны-урыны менән бәләкәй генә үҫентеләр үҫкән ҡоро тигеҙлекте тәшкил итә. Ҙур урмандар булған булғанлыҡҡа, әммә уларҙы башҡорттар яғыулыҡ итеп тотоноп бөткән. Башҡорттар урман хужалығын дөрөҫ итеп алып бара белмәй ахыры, шул арҡала бер нисә тиҫтә йыл элек был киң тигеҙлек барлыҡҡа килгән. Йәйен, ҡыр ҡоштары менән тулған күлдәр гүләп тора, тәбиғәт йәнләнә. Ҡышын был ерҙәрҙә тәрән тынлыҡ урынлаша, тереклек билдәләре бөтөнләй күренмәй. Әйткәндәй, тәбиғәттәге ошо бер төрлөлөк башҡорт тормошона ла күсә.

Башҡорттар ҡасандыр муллыҡта һәм хөрлөктә йәшәгән, әммә хәҙер уларҙың хәле бик аяныс. Йәшәйешен яҡшыртыу йәһәтенән улар алға атламаған, киреһенсә, артҡа аҙым яһағандар кеүек. Һис юғында, тәүге тәьҫорат шулай: мәҙәни һәм иҡтисади мөнәсәбәттәрҙә башҡорттар фәҡир рус крәҫтиәндәренән дә аҫтараҡ тора. 1911 йылдағы йотлоҡ уларҙы тағы ла бер баҫҡысҡа түбән төшөрҙө. Тәү сиратта, башҡорттарҙың иҡтисади хәле ҡаҡшаясаҡ. Быға аслыҡ ҡына түгел, уларҙың күпләп ер һатыу юлына баҫыуҙары ла булышлыҡ итәсәк (Столыпин реформалары). Башҡорттарҙы уларҙың ата-бабалары ла тотоп ҡарамаған күләмдәге ҙур аҡса менән алдаштырҙылар. Эскерһеҙ башҡорттар үҙҙәренең иң яҡшы ерҙәрен, һатыуҙан килгән аҡсаға матди хәлемде яҡшыртырмын, тигән хәйләһеҙ уй менән һата. Был фекергә уларҙы башҡорт ерҙәре ярҙамында үҙҙәренең биләмәләрен киңәйткән "изге" күңеллеләр генә түгел, шулай уҡ башҡорт ихтыяждарына тура ҡыҫылышы булған кешеләр ҙә этәрә. Бер һүҙ менән әйткәндә, был "ҡара йыл" башҡорттар өсөн тура мәғәнәһендә ҡара булырға вәғәҙә итә.

Ер һатыусы башҡорттар ҡулдарына йөҙ-ике йөҙ һум аҡса алырға тейеш. Беҙҙең заманда был аҡса ҙур түгел, әлбиттә, әммә ошо сумма башҡорттарҙы ҡыҙыҡтырыу өсөн етә. Улар өсөн йөҙ һум башты әйләндерә алырҙай ҙур аҡса һәм ошо йөҙ һумға уларҙың ерҙәренең яртыһын һатып алырға ғына түгел, үҙҙәрен мәңгелек бойондороҡта йәшәтергә мөмкин.

Дөрөҫөндә, ас ҡыштан һуң ярлы башҡортто аяҡҡа баҫтырыу өсөн биш тапҡырға артыҡ йөҙ һум кәрәк... Башҡорттарҙың иҫәпләүҙәре буйынса, йөҙ һум аҙыҡ-түлек һатыусы сауҙагәр менән иҫәпләшеү һәм малға аҙыҡ һатып алыуҙан тыш, бөтөн башҡорттарға "халыҡ" байрамы ойоштороу өсөн дә етергә тейеш. Йорт ҡапҡаларында хужаның киң күңеллелеге һәм ҡунаҡсыллығы билдәһе булып, һарыҡ тиреһе эленеп торһон һәм йәштәр бер нисә көн рәттән хужа иҫәбенә күңел асһын әйҙә! Ә үҙенә һәм мохтажлыҡта интеккән ғаиләһенә йөҙ һумдан бер тин дә ҡалмаясағы хаҡында башҡорт уйланмай. Яҡын киләсәге хаҡында уйланмағанға күрә, ул "артыҡ" ерҙәрен осһоҙға һатыуының әҙемтәләрен күрергә лә һәләтле түгел. Ә ошо ваҡытта шул "артыҡ" ерҙәр тирәләй ялҡынлы бәхәстәр ҡыҙа, төрлө элементтар йәлеп ителгән асыҡ һәм аҫтыртын көрәш бара..."

**Азамат ӘБУТАЛИПОВ әҙерләне.**

*ШАҢДАУ...*

## ҠАҒЫҘҒА ТЕРКӘЙ БАРЫҒЫҘ

"Киске Өфө" гәзитенең 33-сө һанында Урал Мостафиндың "Тау Хәлите" тип аталған хикәйәте донъя күргәйне. Уны уҡығас, ошо юлдарҙы яҙырға булдым. Беҙ Урал менән бергә уйнап үҫтек. Урал тәҙрәһенән - унғараҡ, мин һулғараҡ ҡараһаҡ, Хәлит олатайҙың өйө күренер ине. Уның хәтеренең шәплегенә әле лә иҫем китә. Ул кем менән ҡасан һөйләшеүен һүҙмә-һүҙ хәтерләп, беҙгә, балаларға һөйләр ҙә ултырыр ине. Беҙ, билдәле инде, йотлоғоп тыңлайбыҙ. Уның һөйләгәндәрен яҙып барһаң, бер үҙғәртеүһеҙ роман итеп баҫтырырға булыр ине. Ул ваҡытта магнитофондар булмауына әле булһа үкенеп ҡуям (Совет заманында магазиндарҙа бөтөн нәмә лә булды, тиеүселәр әле бар).

Урманда ағас ҡырҡыусы булып эшләгән сағымда ҡышҡы кистәрҙә йыш ҡына олатайҙың өйөнә инеп ултырыр инем. Бабай иң тәүҙә минең эшемдең барышы менән ҡыҙыҡһына - бөгөн нисә кубометр ағас йыҡып, штабелгә һалыуымды һорай. Бер аҙ ултырғас: "Үә-ә-әй", - тип, бәйәнен башлар ине. Бер көн шулай Ҡәнифә юлы тураһында һүҙ сыҡҡас, ул: "Ҡәнифә юлы булған бер ниндәй ҡыҙ ҙа ҡайтмаған. Был юл - башҡорттарҙың төрөк батшаһына йөрөгән йәшерен юлы булған!" - тип, ҡырҡа һуҡты. Ул саҡта Хәлит ҡарттың һүҙенә әллә ни әһәмиәт бирмәгәнмен, хәҙер килеп, "Ысынлап та шулай булыуы бар бит", тигән фекергә килдем. Юл бит көньяҡҡа табан бара. Дин буйынса беҙ Хәнифә мәҙхәбенә ҡарайбыҙ. Батша һалдаттарының иғтибарын ситкә йүнәлтеү өсөн халыҡ махсус рәүештә был юлдың тарихын Ҡәнифә исемле ҡыҙға бәйләгәндәр, тип уйланыла.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Ошо хат аша гәзит уҡыусыларға мөрәжәғәт иткем килә: ошондай халҡыбыҙҙың тарихы сағылдырылған легендаларҙы ололарҙан һөйләтеп, элек һөйләгәндәрен иҫегеҙгә төшөрөп, ҡағыҙға теркәп ҡуйығыҙ, диктофонға яҙҙырып алығыҙ. Тарихыбыҙ биттәрен тергеҙеүгә һәр кем шулай үҙ өлөшөн индерә ала бит.**

**Әкрәм ҠӘЙЕПҠОЛОВ.**
**Баймаҡ районы II Әткол ауылы.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

## БАШҠОРТТАР
## Ғаилә көнкүреше һәм халыҡ байрамдары

Бәпес тыуғандың өсөнсө көнөнә атай кеше мулланы һәм мәзинде, ҡунаҡтарҙы саҡыра. Әгәр малай тыуһа, ул уға фатиха биреүҙәрен, балаға бәхет, байлыҡ һәм ихтирам теләүҙәрен һорай. Ҡунаҡтар амин тота, һуңынан йыйылыусылар янына баланы алып сығалар һәм мулла уның ҡолағына өс тапҡыр ата-әсә һайлаған исемде атап, аҙан һәм ҡамат әйтә. Ошо йоланы үтәгәндән һуң ҡымыҙ, сәй эсәләр. Урал аръяғындағы башҡорт байҙарында сәй табынынан һуң ҡунаҡтарға киндер күлдәк, яулыҡ һәм башҡа әйберҙәр бүләк итеү йолаһы бар. Ҡунаҡтар, үҙ сиратынд,а сабыйға ҡолон, быҙау, аҡса әйтә.

Исем ҡушыу йолаһын малай өс йәшкә еткәнгә тиклем сөннәтләү йолаһы тулыландырып тора. М. Байышев һүҙҙәренсә, был эш менән махсус кешеләр - бабалар, сөннәтселәр шөғөлләнгән. Улар ауылдан-ауылға йөрөгән һәм бер йыл эсендә бер районды урап сыҡҡан. Әҙәбиәттә был һөнәрҙең һәм исемдең нәҫелдән тапшырылыуы тураһында мәғлүмәт бар, ә сөннәтселәр мосолман Диниә назаратынан махсус таныҡлыҡ ала. Йоланы башҡарғанда, ҡыҫҡа ғына аят уҡылғандан һуң, малайҙың енес ағзаһы тиреһе тарттырылып, ике ағастан торған ҡыҫымға ҡыҫтырыла һәм артыҡ тире тиҙ генә ҡырҡып алына. Яраға, ғәҙәттә, көл һибелә һәм бер нәмә менән дә бәйләнмәй.

Яңы тыуған бала атлай башлағанға тиклем сәңгелдәктә ята. Уларҙың иң ҡыҙыҡ төрө И. И. Лепехин тарафынан һүрәтләнә. Ул "ҡайын ҡайрыһынан кәмәгә йәки улаҡҡа оҡшатып яһала. Тирә-яғынан тал сыбыҡтары менән нығыталар. Эске һәм тышҡы яҡтан, сабыйҙың күкрәк тәңгәленән, ике яҡтан элмәк яһала. Аяҡ тирәһенән дә шундай ике элмәк ҡуйыла. Улар ярҙамында, бала бишектән ҡолап төшмәһен өсөн, уның аяғын һәм күкрәгенән бәйләп ҡуялар. Ҡабырғаһына ҡайыш нығыталар һәм ул ҡулбаш аша кейелә. Шулай итеп, һыбай барыусы башҡорт ҡатын-ҡыҙы сабыйын алып йөрөй һәм уны китеп барған ваҡытта ла имеҙә алаған, ә бала, бәйле булараҡ, хатта ат абынған йәки башҡа осраҡтарҙа ла сәңгелдәктән ҡолап төшмәгән". Бындай сәңгелдәк төрө XX быуат башында Урал аръяғында ғына түгел, гәрәй-ҡыпсаҡ башҡорттарында ла осрай. Туҙҙан яһалған бишек ике өлөштән тора. Уның береһе, яҡтары бөгөлөп, нигеҙҙе, бишектең төбөн тәшкил итә. Икенсе өлөшө еп ярҙамында нигеҙгә тура мөйөшлө итеп тегелә. Уртанан дуға формаһында бөгөлгән тал сыбығы ҡуйыла. Уға яулыҡ йәки туҡыма киҫәге ҡаплана. Бишек төбөнә, баланың кесе ярауы һеңһен өсөн, сөрөк һалына **(һүрәт)**.



Туҙ кәрзингә оҡшатып эшләнгән бишек, әсә кеше яланда эш менән булышканда ағасҡа элеп ҡуйырға йәки баланы күтәреп ҡайҙалыр алып барғанда ҡулбашҡа элеп алырға уңайлы.

Бишектең сәңгелдәк тип аталған төрө лә осрай. Ул дүртмөйөш формаһындағы рамдарҙан тора. Уның төбө йүкәнән үрелә йәки киндер менән тарттырып тегелә. Рам дүрт мөйөшлө лә була, эллипс формаһындағылары ла осрай. Бындай сәңгелдәк дүрт мөйөшкә нығытылған бауҙар ярҙамында эленә **(һүрәттәр)**.





***✓ Йәмәғәт эштәренә әүҙем йәлеп итеү, ғаилә именлеген һаҡлау маҡсатында ауылыбыҙҙа республикала беренсе булып "Ир-егеттәр ҡоро" ойошторҙоҡ. Был ҡорҙоң эш һөҙөмтәһе буласаҡ, тип ҙур ышаныс менән әйтә алам.***



**Ысын булһа, тәүтормошта маймылдың кешегә әйләнеү процесында төп ролде хеҙмәт үтәгән. Кешене кеше итеп йәшәтеүсе - ул, ысынлап та, хеҙмәт икәнлегендә бер шик тә юҡ, әммә ләкин һуңғы ике тиҫтә йыл эсендә илдәге хәл менән бәйле мәшғүллектән мәхрүм тороп ҡалған эшһеҙҙәр армияһының кәмеүгә табан бармауы бик күп ир-егеттең тормош психологияһын кирегә табан үҙгәртте: улар эшләмәйенсә лә ашап-эсеп, күңел асып йөрөүҙе ғәҙәти хәл итеп күрә башланы. Типһә тимер өҙөрлөк ир-аттың бәғзеһе ҡатыны елкәһендә йәшәүҙе хуп күрә йә ҡартайып бөткән ата-әсәһе пенсияһын ашап ята, бик тә булмаһа - балалар пособиеһынан да баш тартмай, һис тә ғәрләнмәй. Ни булды һуң ир-егеттәребеҙгә? Рәхәткә кеше тиҙ өйрәнә, тиҙәр. Өйҙә ятып, әллә уларҙың психикаһына зыян килдеме икән (ысынлап та, 3-4 аҙна больничныйҙа ятҡанда ла психикаңда үҙгәрештәр тоя башлайһың икән ул: ялҡауландыра, тәртибеңдә пассивлыҡ, битарафлыҡ һәм депрессия башлана, хатта ки ҡыл да ҡыбырлатмаҫлыҡ хәлгә килеп етеүең ихтимал). Көслө затҡа бындай ирекһеҙ "тотҡонлоҡтан" ҡотолоу юлдары бармы? Һорауҙарыбыҙҙы Күмертауҙан "Юшатыр" гәзитенең яуаплы секретары Тәлғәт ШАҺМАНОВҡа, Әбйәлил районынан Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Радик ӨМӨТҠУЖИНға, Баймаҡ районы Ярат ауылының "Аҡһаҡалдар ҡоро" етәксеһе Мөхтәр МОНАСИПОВҡа төбәнек.**



# ИР-ЕГЕТТӘР ҺӘМ... АУЫЛДАР

## Был бәйләнештең ҡаҡшауы ниндәй бәләләргә тарыта?

**Т. Шаһманов:** Был хәлдән сығыуҙың берҙән-бер юлы - хеҙмәт. Һуңғы йылдарҙа ғаиләлә лә, мәктәптә лә балаларға хеҙмәт тәрбиәһе биреү күҙ уңынан төшөп ҡала бара. Беҙҙең халыҡ былай ҙа яйманыраҡ бит инде. Был һүҙемде ғәйепкә алмаһын ине милләттәштәрем. Егәрлелек, уңғанлыҡ, хеҙмәт һөйөү мәсьәләһендә үҙебеҙҙең ниндәй кимәлдә булыуыбыҙҙы Башҡортостанға эш эҙләп килгән үзбәктәр менән сағыштырыу ҙа етә. Уларҙың: "Их, һеҙҙәге кеүек сөм-ҡара тупраҡ, һеҙҙәге кеүек йылға-күлдәр беҙҙә булһа, белер инек нисек йәшәргә, нисек байырға", тигәндәрен ишетә йөрөйбөҙ бит...

**Р. Өмөтҡужин:** Хеҙмәттең дә төрлөһө була: физик хеҙмәт (тән хеҙмәте), аҡыл хеҙмәте (аң хеҙмәте), күңел хеҙмәте (йән хеҙмәте). Был өс төрлө хеҙмәтте лә емереүсе көс - ялҡаулыҡ. Дарвин бабайға ышанғанда, маймылдар физик яҡтан беҙҙән егәрлерәк булған, күрәһең. Тик ғалимыбыҙ аҡыл хеҙмәте менән күңел хеҙмәте тураһында уйланмаған да хатта. Бөгөн дә тик физик хеҙмәт кенә күҙгә күренеп баһалана һымаҡ: эшләмәгән - тешләмәй. Ир-уҙаман "тешләрлек" физик эш тапмай икән, хеҙмәттең ҡалған ике төрөнә мөрәжәғәт итһендәр, Хоҙай аң менән йәнде бөтәбеҙгә лә тигеҙ биргән бит.

**М. Монасипов:** "Ни сәсһәң - шуны урырһың" тигән халыҡ мәҡәлен иҫкә төшөрөү ҙә етә бында. Ир-егеттәребеҙҙең бөгөнгө хәле ата-әсәләрҙең, өлкәндәрҙең балаларға тейешле кимәлдә рухи тәрбиә бирмәүенән килә ул. Ысынбарлыҡта беҙ күптән инде балаларҙы тәрбиәләмәйбеҙ. Бер-ике йәштән балалар баҡсаһына, унан һуң мәктәпкә, артабан институтҡа бирәбеҙ. Өлкән быуын кешеләрен иманлы ата-әсә тәрбиәләгән, ә хәҙерге йәштәрҙе телевизор, интернет тәрбиәләй. Балаларыбыҙ сабый сағында - балалар баҡсаһына, артабан мәктәпкә уҡырға барғыһы килмәй, һуңынан эшләгеһе лә килмәй. Әгәр кеше бала саҡтан дөрөҫ тәрбиә алһа, ата-әсә улар өсөн үрнәк булһа, йәштәребеҙ, шул иҫәптән ир-егеттәребеҙ, улай булмаҫ ине.

Көслө заттарҙың ошондай хәлгә төшөүендә ҡатын-ҡыҙҙың да ғәйебе барҙыр. Кешенең етешһеҙлеге булмай тормай. Ҡатын кеше, иренең ҡайһы бер ҡырын яҡтары булған хәлдә лә, сүп өҫтөнә сүмәлә өймәй, уның яҡшы яҡтарын күрергә тырышып, уның һүҙен алға ҡуйып, ихтирам итеп торһа, ир абруйы артыр ине, балалар ҙа атайҙарын хөрмәт итеп, уны ғаиләнең тотҡаһы, иң абруйлы зат күреп ҡабул итер ине. Ҡатын-ҡыҙҙың, ире алдына төшөп, улар башҡарырға тейешле эште үҙе башҡарыуы ла ирҙе кәмһетә, абруйын төшөрә. "Ир-егет бит үҙенең ғаиләһе өсөн көтөүсе һәм ул үҙенең көтөүе өсөн яуаплы; ә ҡатын-ҡыҙ йорт эсендә көтөүсе һәм үҙенең көтөүе өсөн яуаплы." Ошо хәҙистең мәғәнәһен ир бала күңеленә йәштән һеңдерергә кәрәк. Эйе, ир кеше өҫтөн булырға тейеш, ә өҫтөнлөккә ҙур тырышлыҡ менән генә өлгәшеп була. Ир-аттың урыны - йәмғиәттә. Ир кеше йәмғиәттә тейешле урында булһын өсөн, ҡатын кеше өйҙә булырға, иренең йәмғиәт өсөн тырышып йөрөүен тәьмин итергә, уны дәртләндерергә тейеш.

Шөкөр, беҙ күтәргән әлеге проблема беҙҙең Баймаҡ районы Ярат ауылында юҡ тиерлек. Ғаиләләр күпләп мал көтә, үҙ эштәрен аса, бик булмаһа, вахта ысулы менән ситкә китеп аҡса табыу яйын күрәләр. Ир-егеттең абруйын күтәреү, уларҙы күпләп үҙ эштәрен асыуға өндәү, йәмәғәт эштәренә әүҙем йәлеп итеү, ғаилә именлеген һаҡлау маҡсатында ауылыбыҙҙа районда ғына түгел, республикала беренсе булып "Ир-егеттәр ҡоро" ойошторҙоҡ. Был ҡорҙоң эш һөҙөмтәһе буласаҡ, тип ҙур ышаныс менән әйтә алам.

**▸ Эшһеҙлек, депрессия, билдәле, эскелеккә килтерә. Ләкин ошомо һуң эскелектең сәбәптәре? Эшһеҙ ятҡан хәлдә лә, эсмәйенсә йәшәп буламы?**

**Р. Өмөтҡужин:** Бахмурҙан ҡотолоуҙың да, эскелектән арыныуҙың да берҙән-бер юлы - иҫерткес эсемлектәр ҡулланмау. Ҡалған төр эсемлектәрҙе күңел теләгәнсе эсергә мөмкин. Иҫерткес эсемлектәр - тыйылған ғәмәл, табу. Тыйылғандан тыйылмауҙың язаһы оҙаҡ көттөрмәй, тере сағында уҡ ҡыуып етә. Эшһеҙ ятҡан хәлдә лә ни эсергә кәрәклеге аңлашылалыр...

**М. Монасипов:** Эшһеҙлек, депрессия, тормош ауырлыҡтары ғына эскелеккә килтерә, тип әйтә алмайым. Эскелектең киң таралыуының сәбәптәре - уны һатып алыу мөмкинлегенең сикһеҙ булыуы һәм үҙәк телевидениенан эскене бер туҡтауһыҙ һәм "тәмләп" күрһәтеүҙә, дөрөҫөн әйткәндә, кешене "мәҙәни эсергә" өйрәтеүендә, тип иҫәпләйем. Эшһеҙ ятҡанда ла эсмәйенсә йәшәп була. Уның өсөн рух ныҡлығы, донъя матурлығын күрә белеү, тормош маҡсатарыңдың асыҡ булыуы кәрәк.

**Т. Шаһманов:** Ауылда эшһеҙлек юҡ. Буш хәбәр ул. Эштән күп нәмә юҡ ауылда. Ә бына эскелек бар. Йыйын ялҡауҙарға "эш юҡ" тигән һүҙ эсеү өсөн бер һылтау ғына. Эскелектең тамырҙары тәрәндә, сәбәптәре үҙебеҙҙә. Беҙҙе башҡа ҡайһы бер халыҡтар вәкилдәре эсергә өйрәтте, тип, ғәйепте бүтәндәргә ауҙарырға тырышыусылар бар. Беҙҙең халыҡ үҙе эсергә өйрәнде. Бер кем дә ауыҙҙарына көсләп ҡойманы. Ә хәҙер үҙҙәре үк йәш быуынды сәләмәт, айыҡ тормош алып барырға өйрәтергә бурыслы. Ҡулдары менән эшләгәнде иңдәре менән күтәрһен әйҙә милләттәштәр!

**▸ Үҙ-үҙенә ҡул һалыусылар һаны ла кәмеүгә бармай. Бында ла әлеге факторҙар (эшһеҙлек, эскелек) сәбәпсе булып торамы, әллә проблеманың тамырҙары (ниндәйҙер йән сире, рухһыҙлыҡ, ихтыярһыҙлыҡ, ғаилә янъялдары, яуапһыҙ мөхәббәт, алғараҡ бағып, перспектива менән йәшәй белмәү һ.б.) төптәрәк микән?**

**Р. Өмөтҡужин:** Проблеманың тамырҙары төптәрәктер, күрәһең. Был проблемаға ҡарата бөгөнгө донъяуи ғилемебеҙ аныҡ ҡына яуап бирә алмай икән, тимәк, яуапты дини ғилемдән эҙләргә кәрәктер.

**М. Монасипов:** Үҙ-үҙенә ҡул һалыусылар һанының кәмемәү сәбәптәре күп инде ул. Эшһеҙлек, эскелек, йән ғәриплеге, рухи зәғифлек, ихтыярһыҙлыҡ, яуапһыҙ мөхәббәт, ғаилә янъялдарын да сәбәп итергә мөмкин. Ә шулай ҙа төп сәбәптәрҙең береһе - кешенең был доньяға ни өсөн яратылыуын, үҙ вазифаларын, бурыстарын аңламауылыр.

Кешенең үҙ ғүмерен үҙе өҙөүе динебеҙҙә оло гонаһ иҫәпләнә. Әммә ғаиләләрҙә балаларға дин, иман тәрбиәһе биреүгә бик үк етди иғтибар юҡ әле. Кеше фажиғәләренең сәбәптәре барыбер ғаиләгә, ундағы тәрбиәгә килеп тоташа. Ғалим-мәғрифәтсе Ризаитдин Фәхретдин: "Ғаилә бәләкәй генә бер дәүләт кеүек", тигән бит. Ғаиләләребеҙҙе дәүләт итеп ҡороуға, унда иман нуры ҡундырыуға өлгәшһәк, әлбиттә, әле әйткән бәләләр ҙә булмаҫына иманым камил.

**Т. Шаһманов:** Милләттәштәрҙең байтағының нәҫел ағасы олоно серек. Шулай булмаһа, үҙ зат-ырыуына ҡара тап төшөрөүҙән хурланып, үҙ-үҙенә ҡул һалыуға тиклем барып етмәҫтәр ине. Мин күп йылдар дауамында башҡорт ырыуҙары шәжә-

***Ярат ауыл биләмәһенә Йәрмөхәмәт тигән ауыл ҡарай. Унда башланғыс мәктәптә бер генә уҡытыусы эшләй, бер фельдшер бар. Башҡа эш урыны юҡ. Ә ауыл бәләкәй генә дәүләт һымаҡ үҫеүен дауам итә. Унда ир-егеттәрҙән торған лидерҙар төркөмө - ауыл старостаһы Ҡадир Ишҡыуатов, "Атайсал" клубы рәйесе Мәүлетдин Мөхәмәтшин, шулай уҡ Ғибаҙулла Хәлиуллин, Сәлимйән Истәков ауылда тәртип, төҙөкләндереү, көтөү мәсьәләләрен ойоштороу һәм башҡа проблемаларҙы халыҡ менән бергәләп, кәңәшләшеп хәл итә. Үҙ көстәре менән мәсет төҙөнөләр. "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнаштылар. Ошондай формаль булмаған лидерҙар тырышлығы менән үҙидара принциптарын тормошҡа ашырғанда, ауылды һаҡлап ҡалыу мәсьәләһе лә бойомға атҡарыла инде. Ир-ат хужа булған ерҙә тәртип тә ныҡлы, ауылдың киләсәге лә өмөтлө була.***

рәләрен яңыртып тәҙәү өҫтөндә эшләйем. Һуңғы бер нисә быуындар теҙмәһендә йә эсеп, йә аҫылынып үлеүсе ир-егеттең күплеге! Етмәһә, ҡатнаш никахтарҙан тыуған, исемдәре ҡолаҡты ярып килгән әллә ниндәй маңҡорттарҙың Тамъян, Ҡыпсаҡ, Бөрйән, Юрматы кеүек ҡәбиләләр шәжәрәләренә атай яғынан килеп эләгеүе! Ҡулдан ҡәләм төшөп китә: был тарихи-рухи мираҫты яңыртып, халҡыма ҡайтарам, тип йөрөүҙән берәй фәтүә бармы икән?

Ир-аттың үҙ-үҙенә ҡул һалыу сәбәптәре күп, тинек. Шуларҙың береһе - ғаиләлә ир баланы алдына тормош, йәшәү маҡсаты ҡуйып үҫтерә белмәүҙә. Мәҫәлән, нишләп әле беҙ улдарыбыҙға: "Һин үҫкәс, Башҡортостандың Премьер-министры булырға тейешһең. Һин өлгөлө ғаилә башлығы, балаларыңа һәйбәт атай, кәләшеңә яҡшы ир булып, халҡыңды, тыуған телеңде, Башҡортостаныңды яратҡан ул, ҡыҙҙар үҫтерергә бурыслыһың. Беҙ ҙә ҡулдан килгән хәтле ярҙам итергә тырышырбыҙ. Шулай ҙа төп яуаплылыҡ һинең үҙеңдә, улым. Беҙҙең нәҫелдән күп арҙаҡлы шәхестәр сыҡҡан, һин дә ырыу тарихына бар яҡлап үҙ өлөшөңдө индерергә тейешһең", - тип, аныҡ маҡсаттар ҡуйырға ҡулыбыҙҙан килмәйме ни? Өйрәнгәнбеҙ барыһын да мәктәпкә япһарып! Таба белгәс, баға ла бел, тигәнде күпселек атай-әсәйҙәр, сабыйҙарының өҫтө бөтөн, тамағы туҡ булһа, шул икән бала үҫтереү, тип уйлай. Ә баланың буйын ғына түгел, аҡылын да үҫтереү, улар алдына аныҡ маҡсаттар ҡуя белеү күбеһенең башына инеп тә сыҡмай. Ике аяҡлы мал кеүекбеҙ инде: ашаһаҡ, эсһәк - шул еткән. Ә ундай балаларҙа ниндәй аң, рух, ғәм, ырыҫ, моң, аҡыл булһын да, уларға ниндәй ҡот ҡунһын! Быларҙың береһе лә йүнләп бала күңеленә һалынмаған, улар эскегә һалыша. Кеше нимә менән булһа ла шөғөлләнергә тейеш бит инде. Ә беҙҙән ир-егет эскелекте яҡын итә.

Бында мәсьәләнең тағы ла бер яғына иғтибарығыҙҙы йүнәлтер инем: ауылда ир-егеттәр генә түгел, гүзәл заттарыбыҙ ҙа эсә. Ҡалайыраҡ эсәләр әле! Бер ниндәй ғәрләнеү тоймайҙар. Берәйһе уларҙы оялтырға, аҡыл өйрәтергә тырышһа, һинең дә балаларың үҫә, тип кенә ебәрәләр. Йәш быуынға ошондайҙарҙың әҙәм ғибрәте булып йөрөүен, ырыу-нәҫелдәренә ҡара тап төшөрөүен даими рәүештә аңлатып тороу, тәрбиәүи эш алып барыу кәрәк. Юғиһә, ғаилә тәрбиәһен өй түрендәге ҡара ҡумта - телевизор менән компьютер һәм кеҫә телефоны алмаштырҙы. Улар - ике осло. Балаһы ысын кеше булһын өсөн йәнен уртаға ярып бирәһе урынға, беҙҙең ата-әсә, һуңғы малын һатып булһа ла, балаһына шул техниканы алып бирә. Бына шул була уларса бала тәрбиәләү.

**▸ Ҡайҙа-ҡайҙа, ә бына ауылда ғаилә ҡормай яңғыҙаҡ ҡартайыусы ир-егет статусын тәбиғи хәл тип иҫәпләйһегеҙме?**

**Т. Шаһманов:** Ниндәй тәбиғи хәл булһын! Ғаилә тәрбиәһен үҙ теләгебеҙ менән юҡҡа сығарыу һәҙөмтәһе был. Ғаиләлә тәрбиә юҡ икән, милләттең дә юҡҡа сығыуы бар. Балаһын өйләндереү - атай-әсәйҙең төп бурыстарынан береһе. Ғаиләле булыуҙың милләтең, нәҫелең өсөн ни тиклем әһәмиәтле икәнен аңламайбыҙ, дөрөҫөн әйткәндә, аңларға ла теләмәйбеҙ, шикелле. Ҡалай рәхәт! Үҙҙәре өйләнгәс, еткән. Балаһы теләһә нәмә эшләһен. Хәҙерге йәштәр үҙҙәре белә, йәнәһе. Ана шул арҡала ир балаларыбыҙ ғаилә ҡороуҙан мәхрүм. Был уларҙың ғәйебе түгел, ә бәләһе. Беҙ, атай-әсәйҙәр, ғәйепле быға! Беҙ ир балаларыбыҙҙы шундай бәхетһеҙлеккә дусар итәбеҙ, беҙ милләтебеҙҙе бөтөрәбеҙ. Ҡыҙҙарыбыҙ алдына йәшәү маҡсаты ҡуя белмәгән эскесе егеттәребеҙҙән бөтән милләт ир-аты ҡосағына ҡасыуҙы хуп күрә йә атайһыҙ бала үҫтерә. Эйе, тәрбиәләмәй, ә үҫтерә генә. Беҙҙең малайҙарға ысын ир - атай, ҡартатай тәрбиәһе етмәй. Бына шунда ята ул проблеманың асылы. Улдарына тәрбиә бирер ине лә ул атайҙар, тик үҙҙәре тәрбиәһеҙ, сөнки бөгөн ғаиләлә ир-егет тәрбиәһе юҡҡа тиң. Сылбыр өҙөк. Уны ҡайҙан тотоп, ҡалай итеп ялғарға?

**М. Монасипов:** Ауылдарҙа ғаилә ҡормайынса яңғыҙаҡ ҡартайыусы ир-егеттәр һаны арткандан-арта бара. Сәбәптәр, әлбиттә, бик күп. Шуларҙың береһе - ауылдарҙа ҡатын-ҡыҙҙарға ҡағылышлы хеҙмәт урындарының аҙ булыуы. Шунлыҡтан ҡыҙҙар мәктәпте тамамлау менән ҡалаларға ынтыла.

Атай-әсәйҙәрҙең балалары аңына: "Балам, ҡалаға кит, ауылдың киләсәге юҡ", - тигәнде һеңдереүе лә сәбәптәрҙең береһелер. Ошолай "тәрбиәләп", беҙ үҙебеҙҙең ҡартлығыбыҙға ғына түгел, ата-бабалар рухына ла балта сабабыҙ. Бала өсөн тыуған нигеҙҙең ниндәй мәғәнәгә эйә икәнлеген үҙебеҙ ҙә аңламайбыҙ, уларға ла аңлатмайбыҙ. Тыуған нигеҙҙе ташлап, бәхет табып булмағаны былай ҙа аңлашыла ла бит...

**▸ Ауылға, бигерәк тә бәләкәйҙәренә, бөтөү ҡурҡынысы янай, тибеҙ. Урыҫ халҡында, батып барыусыны ҡотҡарыу - батып барыусының үҙ эше, тигән бер әйтем йәшәй. Ысынлап та, ауылдарҙы үҫтереү түгел, уны, исмаһам, һаҡлап ҡалыу буйынса дәүләт сәйәсәтенә өмөт итеп булмағанда, уны ҡотҡарыу мәсьәләһе шул ауылдарҙа йәшәүселәр ҡулына ҡарап ҡала түгелме? Бының өсөн ауылда ниндәй тергеҙеү эштәре башҡарылырға тейеш, тип уйлайһығыҙ?**

**Т. Шаһманов:** Ауылдарҙы һаҡлап ҡалыу, уларҙың бөтөнләй юҡҡа сығыуына юл ҡуймау өсөн аҫабалыҡ мәктәбен тергеҙеү мотлаҡ. Әлеге лә баяғы, барыһы ла үҙебеҙҙән тора. Шуға бәйле ырыу традицияларын тергеҙеү ҙә ҡамасауламаҫ. Ана бит, тамъяндар тупланып, Шөғәле Шаһман исемендәге хәйриә фонды төҙөп ята. Насармы ни?

**М. Монасипов:** Ауылдарҙы һаҡлап ҡалыу өсөн үҙидараны үҫтереү кәрәк, тип уйлайым. Бәләкәй, урта эшҡыуарлыҡтың үҫеш алыуы ла ауылдарҙы һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итәсәк. Төрлө йәмәғәт ойошмаларының, ауыл биләмәһе хакимиәте башлығының, ауыл Советы депутаттарының әүҙем эшләүе, мәҙәниәт йорто, мәктәп, китапхана кеүек инфраструктура үҫеше лә ауылдарҙы һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итәсәк.

Ярат ауыл биләмәһенә Йәрмөхәмәт тигән ауыл ҡарай. Унда башланғыс мәктәптә бер генә уҡытыусы эшләй, бер фельдшер бар. Башҡа эш урыны юҡ. Ә ауыл бәләкәй генә дәүләт һымаҡ үҫеүен дауам итә. Унда ир-егеттәрҙән торған лидерҙар төркөмө - ауыл старостаһы Ҡадир Ишҡыуатов, "Атайсал" клубы рәйесе Мәүлетдин Мөхәмәтшин, шулай уҡ Ғибаҙулла Хәлиуллин, Сәлимйән Истәҡов ауылда тәртип, төҙөкләндереү, көтөү мәсьәләләрен ойоштороу һәм башҡа проблемаларҙы халыҡ менән бергәләп, кәңәшләшеп хәл итә. Үҙ көстәре менән мәсет төҙөнөләр. "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнаштылар. Ошондай формаль булмаған лидерҙар тырышлығы менән үҙидара принциптарын тормошҡа ашырғанда, ауылды һаҡлап ҡалыу мәсьәләһе лә бойомға атҡарыла инде. Ир-ат хужа булған ерҙә тәртип тә ныҡлы, ауылдың киләсәге лә өмөтлө була.

**Р. Өмөтҡужин:** Оло өйгә ни кәрәк, кесеһенә лә шул кәрәк, тиҙәр. Икенсе төрлө әйткәндә, бәләкәйендә ни бар, өлкәнендә лә шул уҡ хәл. Юғарыла һаналған проблемалар ҡала ерлегендә лә бар, тик масштаб ҙурыраҡ булғас, улар күҙгә салына һалып бармай. Ауылдарҙың бөтөүенә килгәндә, бөгөн ҙурыраҡ ҡалалар үҙенән бәләкәйерәк ҡалаларҙы "йота" башланы түгелме һуң? Был проблема ауылдыҡы, быныһы ҡаланыҡы, тип айырып ҡарамайынса, бөтөн халыҡ, бөтөн милләт тураһында берҙәй ҡайғыртырға кәрәк. Ауылдарҙы тергеҙеүгә килгәндә, Бөтә Донъя банкы ҡатнашлығында уҙғарылған "Урындағы инициативаларҙы яҡлау - 2014" проекты унышлы эшләп китһә, ауылдарға, ниһайәт, иғтибар артыр ине, тигән өмөт бар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ауыл проблемаларының бөгөн күп йәһәттән ошо ауылда йәшәүселәрҙең үҙ башланғысына һәм булдыҡлылығына бәйле булыуын күрмәү мөмкин түгел. Дөрөҫ, ситтән килеп, берәүҙең дә урындағы мәнфәғәттәр өсөн янып-көйөп йөрөмәүсе билдәле. Ауыл хакимиәттәренең дә хатта ҡайһы берҙәренең төп бурысы фәҡәт һалым йыйыу эшенә генә ҡалып килә түгелме? Ауылға бына ошондай мөнәсәбәт шарттарында уның мәнфәғәттәрен һаҡлау, яҡлау бурысы, әлбиттә, шунда йәшәгән зыялылар, абруйлы ветерандар - үҙ төйәгенең патриоттары иңенә төшә. Был йәһәттән матур башланғыстар бар ҙа инде. Мәҫәлән, Баймаҡ районы Ярат ауылы уҙаманы Мөхтәр Фәйез улы Монасиповтың ошо ҡорҙағы фекерҙәре шуға дәлил. Автор хаҡ: ерҙе эш итеү, ауыл тормошон яйға һалыу, ир бала тәрбиәләү өсөн ир ҡулдары кәрәк. Яраттарҙың республикала беренсе булып "Ир-егеттәр ҡоро" ойоштороп ебәреүе фәҡәт хуплауға лайыҡ. Башҡаларҙың да был өлгөнө дәррәү күтәреп алыуҙарына өмөт итергә генә ҡала.**

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА
әҙерләне.

*ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!*

# ОЯНАН БАШЛАНДЫ...



**Ауылда ағайымдың таҡта ярыу цехы бар. Эше яйланған, заказдары күп, килеме юғары. Мин үҙем дә ағас эше менән булырға яратам, ләкин цех асырлыҡ матди нигеҙ юҡ. Шуға күрә, яратҡан шөғөләмдән бөтөнләй баш тартмаҫ өсөн генә үҙемдең өйгә ағастан төрлө әйберҙәр эшләйем. Улар иҫәбендә семәрләп-һырлап эшләнгән төрлө ҙурлыҡтағы гөл һауыттары, кейем-һалым элеү өсөн элгестәр, бәләкәй өҫтәл, кухня ултырғыстары, һандыҡтар һәм башҡалар бар.**

Шулай бер көн ағайым килеп, эштәремде ҡарап йөрөнө лә, шөғөләмдән килем алыу юлын өйрәтте. Ул ҡала ситендә шәхси йорт төҙөүселәр менән тығыҙ бәйләнештә эшләй һәм уларҙың талаптарын яҡшы белә. Мәҫәлән, башҡа берәүҙә лә булмаған һәм үҙҙәренең шәхси һүрәттәренә (схема) ҡарап эшләнгән өй йыһаздары менән бер рәттән, йорт хайуандары өсөн дә төрлө әйберҙәр кәрәк икән. Мәҫәлән, эттәре өсөн "өй". Уның нимәһе бар, ауылдағы һәр ихатала эт оялары бар, тиерһегеҙ. Шулай ҙа ул, ләкин ҡала эттәре ауылдағы "кәрҙәштәренән" айырмалы рәүештә, тегеләй-былай ҡатылған ике таҡта аҫтында йәшәргә теләмәй, имеш. Хужалары уларға ысын мәғәнәһендә, стеналары, иҙән-түшәмдәре, ҡыйығы матурлап, төрлө биҙәктәр менән һырланған өй эшләтә. Шул уҡ ваҡытта ул тиҙ генә һүтеп алмалы һәм кәрәк ерҙә мәшәҡәтһеҙ йыйып ҡуйырлыҡ та булырға тейеш. Шулай уҡ инеп-сығып йөрөү өсөн "ишеген" дә беҙ өйрәнгәнсә уйып алынған түңәрәк кеүек түгел, ә эт тегеләй-былай йөрөгәндә үҙе ябылып тороусы ҡатмарлы конструкция итеп эшләү мөһим икән.

Бына ошондай, тәү ҡарамаҡҡа еңел, әммә башҡарыу өсөн ҡатмарлы заказ бирҙе туғаным. "Әгәр ҙә эшеңде оҡшатһалар, заказдар күп буласаҡ, аҡса яғынан да оторһоң", тине ул. Беренсе заказды урын-еренә еткереп, клиенттар теләгәнсә эшләү өсөн өс ай ваҡыт китте. Эшләүен эшләгәс, уны дан итеп башҡарырға кәрәк бит инде, сөнки "оҫта" тигән исемде сифатлы эш менән генә яулап була. Унан һуң "Шул да булдымы эш!" тип башлаған инем дә, оямдың йә бер урыны килеп сыҡмай, йә икенсе ере оҡшамай. Миндә аҡса ҡайғыһы китте, сәм уянды. Шулай, әйтеүемсә, өс ай хитландым, ләкин барыбер эшләп ҡуйҙым тегене. Шул тиклем күркәм килеп сыҡты, минең эт тә бындай ояла йәшәүҙән баш тартмаҫ ине, биллаһи. Ләкин килешелгән буйынса, ояны ағайыма тотторып ебәрҙем. Ике көндән заказ биреүсе башмаҡтай этен эйәртеп үҙе килеп төштө. "Эшең бик оҡшаны. Ундай оҫтаның ҡулын ҡыҫмайынса булмай, тип, үҙем килдем", ти. "Ҡулды ҡыҫыу һәйбәт тә ул, аҡсаһы булһа, бигерәк шәп булыр ине", тип уйлап та өлгөрмәнем, шап иттереп усыма аҡса һалды. "Бына һиңә эшең өсөн 20 мең, ҡулың һыҙлау белмәһен. Минең улымдың һәм ҡыҙымдың эттәренә лә ошондай уҡ оя кәрәк ине. Бер айҙан килеп алырмын", тип, машинаһына ултырып сығып та китте. Ә мин һаман усҡа 20 меңде ҡыҫып тотҡан килеш урам уртаһында торам. Совхоз бөтөрөлгәс, эшһеҙ ҙә йөрөлдө, Себер яҡтарынан алданып та ҡайтылды, Мәскәүгә барып, документтарҙы ла урлатылды. Ғөмүмән, кәм тигәндә 10-15 йыл бындай суммала аҡса күргән юҡ ине. Шуға күрә, хәлемде аңлайһығыҙҙыр, йәмәғәт. Күптәр ошондай уҡ хәлдә көн итә, шуға һүҙҙе күп сурытаһы түгел.

Тәүге заказдан һуң өс йыл ваҡыт үтте. Әлеге ваҡытта ла ағас эше менән булам. Эттәргә оя эшләү менән бер рәттән, башҡа әйберҙәремде лә һатырға оҫтарып алдым. Эше булғас, аҡса яғынан да ҡыйынлыҡтар юҡ. Балаларҙың өҫ-башы бөтәйеп, тәмле-татлыға туйып ҡалдылар. Кәләште әйтеп тә тормайым, өйгә мул ғына килем килә башлағас, күҙгә күренеп үҙгәрҙе: өрмәгән ергә ултыртмай, тәмле аш-һыуынан өҙмәй, матур һүҙҙәрен йәлләмәй, янымда йылмайып-көлөп кенә тора. Өйҙә барыһы ла яҡшы булғас, минең дә күңел көр, кәйеф шәп, хатта хәмер менән хушлаштым. Бына шулай, милләттәштәр, үҙемдең тормошто яйға һалдым.

Ир-егеттәр, ҡулығыҙ эштән ҡурҡмаһа, балта тота белһәгеҙ эшләргә һәм матур йәшәргә була. Бары тик теләк кенә кәрәк. Минең миҫал, бәлки, берәйһенә юл асыр һәм әҙме-күпме аҡса эшләй башлау мөмкинлеге бирер, тип яҙҙым.

**Баттал РАИМОВ.**
**Иглин районы.**

## АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

**Халҡымда нәҫелдән-нәҫелгә күсә килгән матур, ҡолаҡҡа ятышлы исемдәр бик күп. Салауат, Батырша, Азамат, Буранбай, Сәлимә, Урал, Айһылыу - һанай китһәң, был исем-шәрифтәрҙең осо-ҡырыйына сығырмын, тимә. Үрҙә килтерелгәндәрен генә алып ҡарағанда ла, тәүгеләре - иле өсөн йәнен фиҙа ҡылған ир-азаматтарыбыҙ, икенселәре - күңелдәрҙе тетрәтерлек йыр-моңдарыбыҙ, өсөнсөләре менәр йыллап иҫәпләнгән ауыҙ-тел ижадыбыҙҙың тере шаһиттары булып күҙ алдына баҫа. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, милләттәштәрем боронғо исемдәребеҙҙе әллә ни һанға һуға һалып бармай, ата-әсәһе яратып ҡушҡанды ла үҙенсә ауҙарырға тырыша. Үҙҙәре лә һиҙмәҫтән исемдең эстәлеген генә түгел, мәғәнәһен дә ҡырҡа үҙгәртә. Ырыуҙаштарым араһында Баһауетдин-Баһау, Шәрәфетдин-Шәрәү, Абдулла-Апуш, Рәхмәтулла-Әпәтәү, Сабирйән-Сапа, Сынбулат-Санай, Ғәлинур-Ғәләү, Әбделхалиҡ-Әндрәй рәүешен ала. Ҡатын-ҡыҙ шәрифе лә ситтә ҡалмай: Бибикамал-Бибек, Һөппөямал-Һөпөй, Фатима-Батима, Факиһа-Һакиһа-Һаттыйға әүерелә. Яҡташтарым араһында яңы исемдәрен, ҡушаматтарын белгәндәре бар, үҙ иткәндәре лә етерлек, уйын-көлкөгә әйләндереп ҡабул иткәндәре лә байтаҡ, сығырынан-сыҡҡандары ла быуа быуырлыҡ. Бәйән итәсәк ваҡиғалар ошо хаҡта.**




### Хоккей-Һаттый

Факиһа әбей ейәне өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер. Күмкүк күҙле, ап-аҡ йөҙлө ҡулсыр малай тәҫ-башы менән үҙенә тартҡан. Хатта холоҡ-фиғелендә лә үҙенә оҡшаш яҡтарын күреп ҡыуана ҡарсыҡ. Өләсәһенән бер тотом да ҡалмай. Итәгенән айырылһа, берәй ҡазаға осрап ҡына бара. Шуға шул ейәненә ҡот ҡойоуҙан бушамай Факиһа. Быны бөгөн, энер төшөрҙән алда ғына, күҙ менән ҡаш араһында юҡ булды ла ҡуйҙы шул бала. Ҡыҙыл энерҙә сарпыу фәлән ҡағылыр тип хафаланып, урам буйлап улай йүгерҙе, былай сапты әбей. Һыуға төшкән кеүек юҡ булды улы. Ҡараңғы төшкәнсе эҙләп, таба алмағас, тамам өмөтһеҙләнеп, өйөнә ҡайтты. Унда ла тыныслана алманы, өйҙә буш кеүек ине уға, ике күҙен ишектән ала алманы.

Һуң ғына ҡайтты ейәне. Үҙе шул тиклем ҡәнәғәт ине. Өләсәһе ҡаты итеп:

- Ҡайҙа йөрөнөң? - тип уҫал ҡаршы алыуына ла иғтибар итмәй:

- Телевизорҙан хоккей ҡараным! - тип үҙ шатлығы менән уртаҡлашты ейәне.

- Мин уны пыр туҙҙырып ауыл буйлап эҙләйем, ищу һин мине "Һаттый" тип тәләке итеп тораңмы әле, - тип, ишек башында торған сыбыҡты эләктереп, ейәненә уҡтала әбей...

Яраткан командаһының еңеү шатлығынан арынып өлгөрмәгән малай, ни өсөн өләсәһен "хоккей" һүҙе сыбыҡ алырға мәжбүр итте икән, тип аптыраны. Сөнки ауылдаштары Факиһа өләсәһен үҙ исеме менән әйтмәй, "Һаттый" тип йөрөтөүен малай әле аңларлыҡ йәштә түгел ине...

### Әндрәй

Әбделхалиҡ сығышы менән Рәхмәт ауылынан. Байымдан көләш алғас, ҡайны йортонан алыҫ китмәй нигеҙ ҡорған кеше. Йәшәү дәүеренә, заман талабына тиҙ күнегә, йәмғиәт ҡалыбына шунда уҡ яраҡлаша белгән донъяуи зат. Етмәһә, тормоштоң әсеһен-сөсөһөн татыған, ил гиҙеп, нужа һурпаһын эскән ир-ат. Ауылда ғына тел әйләндереп Әбделхалиҡ тип өндәшәләр, ә урыҫ халҡы мулла ҡушҡан исемен үҙ итмәгәс, аптырағандан бер килеп "Андрей я", тигәйне лә, яҡташтарының ҡолағына тәл булғас, онотолдо мосолман шәрифе. Шул арҡала Әбделхалиҡ түгел, Әндрәй хәҙер. Йәш сағында күңеленә ауыр алма ла Әндрәйҙек Әндрәй. Олоғая төшә ата-әсәһе ҡушҡан исемдең мәғәнәһен, ҡәҙерен аңланы. Тәүҙә Әндрәй тип өндәшкәндәргә улай тип әйтмәүҙе үтенде. Йәшерәктәрҙе шелтәләне, тиргәне. Кафыр исемен яратмағанын һиҙеп ҡалған ауылдаштарына етә ҡалды, "Әндрәй"ҙе йышырыҡ һалдыра башланылар. Әндрәй еҙнә, Әндрәй ҡустым, Әндрәй ҡоҙа, Әндрәй ҡорҙаш һ.б. өндәш һүҙ төркөмдәре барлыҡҡа килде. Аптырағас, йыш тәкәтен ҡороткан яҡташтарын йыйып, һүҙгә килешмәксе булды.

- Ағай-эне, - тине ул йыйылыусыларға,- хәҙер мин маңҡа малай түгел, зинһар, башҡа мине "Әндрәй" тип әйтмәгеҙ инде. Әйҙә, ирҙәрсә килешәйек, бына һеҙгә бер йәшник араҡы, эсәйек тә, шул исемде онотайыҡ!

- Үәт, ир икәнһең, бына, исмаһам, другое дело! - тип күтәреп алды халыҡ. Табын ҡоронда Әбделхалиҡ ағай, Әбделхалиҡ ҡусты, Әбделхалиҡ туған һүҙе генә ҡолаҡ төбөндә яңғырап торҙо. Бик риза булып ҡайтты Әбделхалиҡ ҡорҙан. Тынысланып, оҙағыраҡ йоҡлап ташлаған. Бисәһе:

- Ана, һинә килгәндәр,- тигәнгә урамға сыҡҡайны, кисәге табындаштары:

- Әндрәй, баш ауырта, нишләйек? - тип ҡаршы алды...

### Шәрүш

Беҙҙең төбәктә ситтән килгән түрә, уҡытыусы, табип кешегә фамилияһын ғына әйтеп өндәшәләр. Әле лә колхоз рәйестәрен яҡташтарым Хәснәтдинов, Хәйеров, Рамаҙанов, Балдашов, элекке уҡытыусыларҙы Мөхәмәтдинов ағай, Хәйбуллин ағай, врачтарҙы Зайцев, Хисмәтов тип кенә хәтерләй.

Үткән быуаттың алтмышынсы йылдарында баш табип булып килгән Минисламды ла "Ишкужин" тип атауҙарын белгәс, район үҙәгендә Фәлән Фәләнович булып йөрөгән кеше үҙен түбәнһетеп әйткән кеүек ҡабул иткәйне. Ауылға яңы килгән табип, шаҙра битле булыуын иҫәпкә алып, уға "Шөрөш" тигән ҡушамат таҡҡанын белмәй ине әле. Уның серен дә һис уйламағанда белеп, төп башына ултырҙы Минислам.

Дауаханаға бер күбәләк халҡы ғына мөрәжәғәт итмәй, күрше генә яткан Силәбе өлкәһе Тайһары ауылынан да киләләр. Мәғлүм булыуынса, унда урыҫ халҡы йәшәй. Быны шундай знакумдарҙың береһе йәкшәмбе көн теше ауыртыуға түҙә алмай, Байымға килә. Дауаханаға барһа, табип ял итә икән. Бер аҙ уйланып торғас, врачтың йортона барып, үтенесен белдермәксе була. Тәү осраған кешенән табип йортон белешә. Тегеһе ихлас күңелдән йортто өйрәтә лә: "Как зайдешь, спроси "Шөрөш тут живет?" А то он человек строгий, не любит других обращений", - тип, өгөт-нәсихәтен бирә. Аңын-тонон аңламаған урыҫ, "шөрөш" һүҙенең мәғәнәһен түгел, әйтелешен дә теүәл иҫләмәй, дауалаусы йортон табып, өйгә ингәс тә:

- Здравствуйте, Шәрүш тут живет? - тип һалдыра.

Бер аҙ аптыранған йорт хужаһы:

- Не Шәрүш, а Ишкужин, - тип төҙәтмә бирә. Бер аҙҙан ғына урыҫ аша үҙенең "Шөрөш" икәнен аңлай.

Ярай әле, Гиппократ антына тоғро ҡалып, урыҫты ғәйепләп тормай, дауалап ҡайтара.

### В чем дело, Жорис?

Был тормоштоң серҙәрен аңлап бөтөүе ҡыйын. Ҡатын-ҡыҙ фиғеле бала бағыу, донъя көтөү, намыҫ һаҡлау кеүегерәк донъяуи фәлсәфәгә ҡоролһа, ир-аттың уй-зиһене икенсе юҫыҡтараҡ фекер йөрөтә. Шуға ишара бер фәһемле хәл.

Яҡташтарымдың икәүһе ҡымыҙ һауыусы Көнһылыуға күҙ ата. Яңғыҙ ҡатын, йәйләүҙә айырым йортта йәшәй, абышҡаһыҙ, бер үҙе ир ҡуйынына зарығалыр, тигән фекергә килә былар. Артып киткән ир көҙрәтен ошо ҡатында һынамаҡсы була былар. Көслө заттан булһалар ҙа, исем сығыуҙан шөрләп, ғаиләләре, итәк тулы балалары алдында бит йыртмаҫ өсөн дин әһеле ҡушҡан исемдән баш тартып торорға килешәләр. Шуға Көнһылыу янына барырға булғас, береһе - Жорис, икенсе Морис булып китә.

Энер төшөүгә, Көнһылыу йәшәгән йортҡа киләләр. Йәрәбә буйынса йылы ҡосаҡты тәүге булып татыу бәхете Жорисҡа төшә. Ир ҡомары - беренсе булыуҙа, шуға ат менгәндәй ҡыуанған Жорис ҡыйыу рәүештә аласыҡҡа юллана. Эскә үткәс тә, дилбегәне ҡыҫҡа тоторға була. Тышта бит дуҫы сират көтә. Шуға бер ниндәй инеш һүҙһеҙ, иркәләп, наҙлашыуһыҙ, урындыҡта яткан Көнһылыуҙы аймап, ҡосаҡлай ала...

Тышта Жористың шундай бәхетле икәненә көнләшеп, тиҙҙән ундай ләззәтте үҙе лә татыясағынан йөуанып алып торған Мористың ҡолағына ҡапыл биҙрә шалтыраған, һүгенгән тауыштар ишетелә, шунан шар асылып киткән ишектән дуҫы атылып килеп сыға, артынан көйәнтә осоп килеп арҡаһына бәрелә:

- В чем дело, Жорис, - тигән булды ти Морисы.

Күп осраҡта "Ирҙәргә ирлек булғаны ҡатындарға хурлыҡ" тигән хәҡиҡәтте көслө зат аңламай шул.

### Мөьмин - Мөьминә

Мөьмин - Шайморатов исемендәге колхоздың баш агрономы, Мөьминә - хужалыҡтың алдынғы быҙау ҡараусыһы. Икеһе лә абруйлы, эштәренә мөкиббән бирелгән кешеләр. Исемдәре ойҡаш булһа ла зат-ырыуҙаш та, хатта ауылдаш та түгел улар. Тәүгеһенең ырыу-тамыры Байым ауылы менән бәйләнһә, икенсеһенең сығышы үҙәк ауылдан йылға аша ғына урынлашҡан Туйышҡа барып тоташа. Аттары ла беҙҙең төбәктә һирәк ҡолаҡҡа салынғандарҙан. "Ата-әсәһе ҡайҙан табып ҡушты икән был исемде?" тип аптырауҙар ла бихисап. ХХ быуаттың 60-80-се йылдарында коммунистик тәғлимәт нигеҙендә тәрбиә алған йәштәр өсөн үтә лә ят был исемдең ғәрәп теленән тәржемәһе "дингә ышаныусы" икәне әлеп менән таяҡтың нимә икәнен белмәгән быуындың башына ла инеп сыҡмаған, күрәһең. Шулай ҙа бер ваҡиға ошо ике ырыуҙашымдың исем-шәрифен халыҡ күңелендә ҡалдырыуға бер сәбәп булды.

Үткән быуаттың 70-се йылдарында шайморattар төбәгендә ҡар шул тиклем көслө яуа торғайны. Ауыл эсендә ҡайҙа ҡарама - көрт, йырып үтермен тимә. Шундай йылдарҙың береһендә колхоз рәйесенән: "Туйыш ауылы тирмәнендә колхозсыларға он һалдырып, таратып бирергә", - тигән фарман ала Мөьмин. Ләкин бойҙай - Байымда, тирмән - күрше ауылда, ә юл юҡ. Юл ярырлыҡ ҡеүәтле трактор Йәнекәй ауылында ғына. Агроном өсөнсө бригада бригадирына бульдозеры менән тракторсы Буранбайҙы Байымға ебәреүе тураһында телефон аша хәбәр итә. Ете саҡрымда ятҡан ауылдан С-100 тракторы Байымға төшкө табан ғына килеп етә. Буранбайға ырҙын табағындағы бойҙай складын күрһәтеп, шунда юл ярырға, артабан тирмәнгә тиклем трассаны таҙартырға ҡуша Мөьмин. Колхозда ашхана булмауын иҫенә төшөрөп, Туйышҡа тракторист өсөн ашһыу хәстәрләргә китә. Тирмәндән алыҫ йәшәмәгән туғаны менән төшкөләккә аш бешереү тураһында килешә лә, ҡайтышлай Туйыш менән Байым араһында Буранбайҙы тап итеп, төшкө ашҡа бара торған өйөн өйрәтеп, үҙе ырҙын табағына йүнәлә.

Буранбай бульдозеры менән юлды, тирмән тирәһен гөрөп таҙартҡас, агроном өйрәтеп ебәргән өйҙө самалап, таныш түгел ауылда алай-былай ҡаранып китеп барғанында, гөргөһөнә йыйылған ҡарға көсө етмәй, ҡорос аты һүнә лә ҡуя. Капотын асып, һүнгән тракторын яңынан ҡабыҙа алмай маташҡан тракторсы эргәһенә бер әбей килеп:

- Мөьминә ебәрҙеме?- тип һорай.

- Әйе, Мөьмин ебәрҙе, - тип яуаплай Буранбай.

- Тәҙрәнән күҙенде алма, тракторҙы ҡарап ҡына ултыр, тип тыҡып-тыҡып сығып киткәйне ҡыҙым. Килеп туҡтаның да, баянан бирле инергә ҡыймай, шул тракторыңда соҡонып тик тораңсы, шуға үҙем сыҡтым әле. Ҡуй, улым, улай оялып торма, бер сит кешеләй булып ней, әйҙә, ин, аш әҙер! - ти ҡарсыҡ.

- Өйөгөҙҙә үтеп китә яҙғанмын, әлдә тракторым һүнде әле, - тип ҡыуаныслы менән уртаҡлаша Буранбай.

- Эй, улым, аштан оло булып булмағанын трактор ҙа белә ул, - тип ебәрә әбей.

Хужабикә тракторсыны өйөнә индереп, ҡулын сайҙы-

✓ *Роспотребнадзор мәғлүмәттәре буйынса, профилактика саралары Эбола вирусының Рәсәйгә инеү хәүефенә кәртә ҡуйҙы, тиергә мөмкин. Һауа юлдары пункттарында сикте үтеүселәргә санитар-контроль тикшереүе көсәйтелде.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ИРТӘГӘҺЕ КӨНГӘ...

## ниндәй ышаныс?

■ Психик яҡтан тотороҡло булған кешеләр үҙҙәренең тормошо әлеге мәлдә үткәнгә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ, ә киләсәк тағы ла яҡтыраҡ буласағына ышана. Депрессия мәлендә был инаныс тулыһынса юҡҡа сыға, ти белгестәр. Канада ғалимдары раҫлауынса, үткәндәргә ҡарағанда бөгөнгө яҡшыраҡ тип иҫәпләүселәр ун йылдан да ошондай уйҙа була. Ә кем үткәне менән бөгөнгөһө араһында айырма күрмәй, киләсәген дә төҫмөрләй алмай. Тап улар яйлап депрессияға килә лә инде. Депрессия хәлендәге кеше киләсәге тураһында уйлауҙан бөтөнләй баш тарта. Шуға ла уларҙы дауалаған саҡта ошоно иҫәпкә алырға һәм яҡшы үҙгәрештәргә көйләргә кәрәк, ти ғалимдар.

■ Туңдырып һатылған ризыҡ һәм фастфуд сәләмәтлеккә зыян килтерһә лә, ризыҡ әҙерләүгә ваҡыт китмәүе һәм көс сарыф ителмәүе арҡаһында улар ҙур популярлыҡҡа эйә. Шулай ҙа гамбургерға ҡарағанда туңдырылған кәтлит һәм билмәндәргә өҫтөнлөк биреүселәр калорияларҙы аҙыраҡ ҡуллана. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, улар фастфуд яратыусыларға ҡарағанда майҙарҙы әҙерәк ашай. Тимәк, бар аҙыҡ-түлек тә бер үк түгел. Шуға ла ризыҡ әҙерләүгә ваҡыт күп китмәһен тиһәгеҙ, туңдырылған ярымфабрикаттар һатып алыу күпкә яҡшыраҡ.

■ Һоло ярмаһы йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын булдырмай. Билдәле булыуынса, артерия стеналарының хроник ялҡынһыныуы йышыраҡ атеросклерозға килтерә. Һоло составындағы авенантрамидтар - фенол антиоксиданттары ҡан күҙәнәктәренә артерия стеналарына ултырырға ҡамасаулай. Етмәһә, авенантрамидтар ялҡынһыныуҙы ла баҫа. Шуға ла һоло ярмаһы йөрәкте ишемик сирҙән һаҡлай һәм холестерин кимәлен түбәнәйтә.

■ Калифорния университеты ғалимдары асыҡлауынса, көнөнә өс сынаяҡ сәй эсеү оло йәштә лә хәтерҙе яҡшы һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итәсәк. Улар тиҫтә йылдар буйына алып барылған 6 төрлө тикшеренеүҙәрҙе берләштереп, ошондай фекергә килгән. Сәйҙең файҙаһы шунда - уның составындағы тиамин ҡартайған кешеләрҙе Альцгеймер ауырыуҙарынан һаҡлай. Көн һайын сәй эсеүселәр аҡыл ҡеүәһен дә һаҡлап ҡала ала, хәтер менән бәйле проблемалар уларҙа өс тапҡырға һирәгерәк осрай.

■ Дархэм университеты неврологы Аманда Эллисон белдереүенсә, ир-ат ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда һалҡын тейҙереү һәм киҙеү симптомдарын ауырыраҡ кисерә. Доктор әйтеүенсә, ҡатын-ҡыҙ һәм ир-егеттең баш мейеһе үҫешенең бер осоронда айырмалыҡтар барлыҡҡа килә. Күп күрһәткестәр, шул иҫәптән, тән температураһы өсөн яуап биреүсе баш мейеһе өлөшө ир-егеттәрҙә тестостерон бүленеп сығыу һөҙөмтәһендә тиҙерәк үҫешә. Мейенең был өлөшө организмға инфекция инеүенә шунда уҡ тәьҫир итә һәм үҙенең эшен башлай, һөҙөмтәлә, тән температураһы күтәрелә. Тимәк, ирҙәрҙә дәүмәл яғынан ул ҙурыраҡ булыу сәбәпле, улар нығыраҡ сирләй.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ҺАҠЛАНҒАНҒА...

## киҙеү ҙә, Эбола ла ҡурҡыныс түгел

**Ошо көндәрҙә РФ Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә МЫРҘАБАЕВА һайлаусылар менән он-лайн конференция үткәрҙе һәм һорауҙарға яуап бирҙе. Бөгөн Сәлиә Шәрифйән ҡыҙының миҙгелгә ярашлы киҙеү һәм башҡа сирҙәргә ҡағылышлы яуаптары менән таныштырмаҡсыбыҙ.**



**➔ Әлбиттә, йыл һайын күҙәтелгән киҙеү быйыл да беҙҙе урап үтмәҫ. Әммә сирләмәҫ өсөн нимә эшләргә, ауырыған осраҡта ниндәй саралар күрергә кәрәк?**

- Киҙеү эпидемияһының көслө ваҡыты 2015 йылдың ғинуарының икенсе яртыһына тура киләсәк тип көтөлә. 12 октябргә ҡарата киҙеү һәм ОРВИ менән сирләүселәр һаны бик күп түгел. Киҙеүҙән иң һөҙөмтәле һаҡланыу сараһы - вакцинация. Ул йылына бер тапҡыр яҙғы-көҙгө осорҙа, эпидемия башланырҙан 2-3 аҙна алдан эшләнә. Ул граждандарҙың барлыҡ категорияһына ла тәҡдим ителә, ләкин бигерәк тә уны хәүеф төркөмөнә инеүселәргә: 6 айлыҡ сабыйҙарҙан башлап, барлыҡ балаларға ла, ауырлы ҡатындарға, 60 йәште үткән ололарға, хроник сирҙәр менән яфаланыусыларға, медицина хеҙмәткәрҙәренә, уҡытыусыларға, студенттарға, хеҙмәтләндереү, транспорт өлкәһендә эшләүселәргә яһатыу бик мөһим. Был төркөм Профилактик прививкаларҙың Дәүләт календарына индерелгән һәм уларға прививка бушлай яһала. Вакцинация ысынлап та киҙеүҙән һаҡлаясаҡ, хатта ауырыған осраҡта ла сир еңел үтәсәк.

Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы тәҡдименә ярашлы, хәүеф төркөмөнә инеүселәрҙең 75 процентына, ә инде дөйөм ил һәм Рәсәй субъекттарында халыҡтың 25 процентына прививка эшләнергә тейеш. Бынан тыш, организмдың үҙенең һаҡланыу көсөн күтәреү зарур. Хәҙерге ваҡытта фармацевтика баҙары киҙеү һәм ОРВИ-ны профилактикалау өсөн Рәсәйҙә һәм сит илдәрҙә етештерелгән бик күп препараттар тәҡдим итә. Әммә уларҙы ҡулланырҙан алда дауалаусы табип менән кәңәшләшеү мотлаҡ. Шулай уҡ халыҡ дауаларын да онотторға ярамай. Гөлйемеш, мүк еләге, ҡыҙыл көртмәле, ҡара ҡарағат, цитрустар, С витамины, һарымһаҡ ҡулланыу файҙалы. Шәхси гигиена ҡағиҙәләрен үтәү, ҡулдарҙы йыш йыуыу зарур.

Өйөгөҙҙө йәки эшләгән бинаны йышыраҡ елләтергә, уларҙа дезинфекциялаусы саралар ҡулланып, туҙандарҙы һөртөп торорға кәрәк. Һауа торошо буйынса кейенеү, организмдың өшөүенә юл ҡуймау, торлаҡ һәм йәмәғәт биналарында температура режимын һаҡлау тураһында ла иҫтән сығарырға ярамай. Организмдың сиргә ҡаршы тороуына туҡланыу ҙа йоғонто яһай. Шуға күрә аҡһым, С төркөмө витаминдары булған аҙыҡ-түлек ҡулланыу яҡшы. Эпидемия таралған осорҙа кеше күп йөрөгән сараларҙа бик ҡатнашмаҫҡа, тын юлдарын һаҡлау өсөн медицина битлектәре кейергә (уларҙы 6 сәғәт кейергә мөмкин, бер тапҡыр ҡулланғанын икенсегә ҡулланыу ярамай), йышыраҡ саф һауала йөрөргә кәрәк. Әгәр үҙегеҙ йәки туғандарығыҙ сирләп китһә (тымау төшһә, тамаҡ әсетһә, температура күтәрелһә, дөйөм хәлһеҙлек күҙәтелһә, баш ауыртһа һ.б.) эшкә, уҡыуға, балалар баҡсаһына барырға ярамай. Табипты өйгә саҡыртыу зарур. Был бигерәк тә эпидемияның көсәйгән ваҡытында бик мөһим, сөнки поликлиникаларҙа сиратта тороу хәлегеҙҙе тағы ла ҡатмарлаштырыуы мөмкин.

Дауаланыуҙың төп принцибы - түшәк режимын һаҡлау. Һалҡын алдырыуға бәйле күпселек сирҙәр дарыу менән дауалауға мохтаж түгел, иң мөһиме - ятып ял итергә, организмға үҙ-үҙен тергеҙеү мөмкинлеген бирергә. Үҙ аллы дауаланыу зыянлы. ОРВИ йәки киҙеү билдәләре күҙәтелгәндә табиптан консультация алыу кәрәк. Быны ни тиклем иртәрәк эшләһәгеҙ, шул тиклем яҡшыраҡ. Тын юлдары ауырыуҙарын ҡуҙғытыусы инфекциялар бик күп, улар тәүҙә бер иш кеүек тойола, әммә эҙемтәләре төрлөсә булыуы ихтимал. Сирләгән ваҡытта күптәр ауырыуҙы аяғөҫтө үткәрергә, эшкә йөрөргә тырыша. Бының менән үҙҙәренең сәләмәтлеген дә, хеҙмәттәштәрен дә хәүеф аҫтына ҡуялар.

Сөскөргәндә, йүткергәндә, тымау ваҡытында ҡағыҙ салфеткалар ҡулланығыҙ һәм уларҙы шунда уҡ ташлағыҙ, икенсе тапҡыр файҙаланмағыҙ. Ауырыу өсөн айырым һауыт-һаба бүлегеҙ, ҡулланғандан һуң уны ентекле йыуып, дезинфекциялағыҙ. Сирлене айырым бүлмәгә урынлаштырыу мөмкинлеге булһа, бигерәк тә һәйбәт. Ошо ябай ғына ҡағиҙәләрҙе үтәгәндә, киҙеү һәм киҫкен респиратор ауырыуҙары ҡурҡыныс түгел.

**➔ Беҙгә Эбола эпидемияһы янаймы?**

- Бөгөн донъяла ошо вирус менән зарарланыусылар һаны 8 меңдән артып китте. Шундай тиҙлектәге халыҡ-ара миграция шарттарында уны теләһә ниндәй илгә килеп инмәҫ, тип әйтеп булмай. Быға сирҙең оҙайлы ваҡыт - 21 көн инкубация осоро үтеүе лә йоғонто яһай.

Беренсе тапҡыр Эбола вирусы тураһында 1976 йылда саң ҡаҡтылар, әммә ул киң таралыу алманы. Хәҙерге ваҡытта вирустың таралыу хәл-торошо бик ҡатмарлы, әммә уның таралыуына ҡаршы әүҙем саралар күргәндә, был процесты туҡтатырға мөмкин.

Роспотребнадзор мәғлүмәттәре буйынса, профилактика саралары Эбола вирусының Рәсәйгә инеү хәүефенә кәртә ҡуйҙы, тиергә мөмкин. Һауа юлдары пункттарында сикте үтеүселәргә санитар-контроль тикшереүе көсәйтелде, ҡурҡыныс инфекцияларҙың билдәләрен асыҡлау маҡсатында айына 1,5 миллион пассажир тикшерелә. Аэропорттарҙың һәм һаулыҡ һаҡлау учреждениеларының медицина хеҙмәттәре эпидемияға ҡаршы саралар ойоштороуға әҙер. Эбола тапмаһын диагностика тикшереүе өсөн заманса лаборатория ойошторолған, сирҙе тиҙ арала тикшереү өсөн кәрәкле препараттарҙың запасы бар.

Әлеге ваҡытта Көнбайыш Африкалағы Рәсәй граждандары араһында Эбола тапмаһы менән сирләүселәр юҡ, Рәсәй территорияһында ла сирләү осрағы теркәлмәгән. Быйыл августа Көнбайыш Африкала булып ҡайтҡан Үҙәк Ғилми-тикшеренеү институты вирусологтары Рәсәйҙә вирус таралыу ихтималлығы бик түбән, тип белдерә. Әммә, һаҡланғанды - Хоҙай һаҡлай, тигәндәй, барыбыҙ ҙа хәүеф факторы тураһында онотмаҫҡа, аныҡ саралар күрергә һәм артыҡ ихтыяж булмағанда Көнбайыш Африка илдәренә барыуҙы кисектереп торорға тейешбеҙ. Әгәр ҙә инде был илдәргә бара ҡалһағыҙ һәм үҙегеҙҙе насар тойһағыҙ, кисекмәҫтән медицина хеҙмәткәрҙәрен иҫкәртергә кәрәк.

**➔ Нисек итеп көҙгө һәм ҡышҡы шыҡһыҙ көндәрҙә депрессиянан һаҡланырға?**

- Көҙгө күңел төшөнкөлөгө - ул үҙенсәлекле психоэмоциональ торош. Ул кәйефтең тотороҡһоҙлоғо, эшләү һәләтенең түбәнәйеүе, йоҡо режимы боҙолоуы, яратҡан эш йәки шөғөл менән булышырға теләмәү менән ҡылыҡһырлана. Бынан тыш, был феномендың физиологик аңлатмаһы ла бар: көндәр ҡыҫҡара һәм ҡояш нурының етешмәүе организмда меланиндың күбәйеүенә килтерә. Белгестәр ҡайһы бер эмоциональ

*✓ Кешеләр үҙ янында булғандарҙың да зарын ишетмәҫ хәлгә килде. Ике кеше араһындағы ғына түгел, дәүләттәр араһындағы бар аңлашылмаусанлыҡтар ошоноң эҙемтәһе лә инде.*

хәл-тороштоң нәҫелдән күсеүе хаҡында ла белдерә. Ҡатын-ҡыҙ, хистойғоға бай булғанлыҡтан, был миҙгелдә бирешеп бармай. Депрессияға хроник стрестар, хеҙмәт һәм ял режимының боҙолоуы, йоҡо туймауы йоғонто яһай.

Әгәр һеҙ миҙгел депрессияһына бирешеүсән икәнһегеҙ, тап ошо ваҡытта сәләмәтлегегеҙҙе күҙәтегеҙ. Туҡланыуығыҙға иғтибар бүлегеҙ: ул аҡһым күп булған аҙыҡ-түлектән (тауыҡ, балыҡ, ныҡ майлы булмаған һөт аҙыҡтары) торорға тейеш. Күберәк емеш-еләк һәм йәшелсә ашағыҙ. Организмда файҙалы витаминдар һәм микроэлементтар ни тиклем күберәк, кәйеф тә, үҙегеҙҙең хәл-торошоғоҙ ҙа яҡшы буласаҡ. Бынан тыш, кәйефте составында эндорфин булған аҙыҡ-түлек (шоколад, банан) ашап та күтәрергә мөмкин. Шыйыҡлыҡты күберәк эсегеҙ, сөнки организм һыуһыҙлыҡтан интекһә, ул дәртһеҙ һәм төшөнкө була.

Эштә лә, өйҙә лә бинаны даими елләтергә онотмағыҙ, саф һауа ла организмға ыңғай йоғонто яһай. Кислородты бер нәмә лә алмаштыра алмай. Шуға күрә, хатта насар көндө лә, һауа торошоноң нindәй булыуына ҡарамаҫтан, урамда йөрөгөҙ. Мөмкинлегегеҙ булһа, эшкә йәйәү йөрөгөҙ. Физик күнегеүҙәр: аэробика, бейеү, йөҙөү ҙә яҡшы ярҙам итә.

Шулай уҡ төҫтөң дә кешенең эмоциональ торошона йоғонто яһауы билдәле. Шуға күрә тормошоғоҙға сағыулыҡ өҫтәгеҙ. Сағыу яҡтылыҡ булған ерҙә булырға тырышығыҙ. Үҙегеҙ өсөн ҡыҙыҡлы шөғөл табығыҙ, дуҫтарығыҙ, яҡындарығыҙ һәм туғандарығыҙ менән йышыраҡ аралашығыҙ. Был ыңғай тәьҫораттар алыу һәм үҙенде кәрәкле итеп тойоу өсөн мөһим. Һәм йышыраҡ йылмайығыҙ. Күпмелер ваҡыттан һуң йылмайыу һеҙҙең ғәҙәтегеҙгә инеп китер һәм тирә-яҡтағылар ҙа һеҙгә йылмайып яуаплар.

**➔ Рәсәйҙә иң сәләмәт кешеләр ҡайҙа йәшәй һәм сәләмәтлек өсөн иң имен шарттар ҡайҙа?**

- Был һорауға яуап биреүе ауыр. Сәләмәтлек төшөнсәһе Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы билдәләмәһе буйынса ауырымауҙы ғына түгел, ә физик, психик, социаль һәм рухи именлекте билдәләй. Бынан тыш, йәмғиәт сәләмәтлеген (медик-демографик процестарҙың; халыҡтың ауырыуҙарының; инвалидлыҡтың; физик сәләмәтлектең, сәләмәтлектең социаль бәйлелеге; интеграль күрһәткестәр) һәм шәхси сәләмәтлек - айырым кешенең һаулығын айырып ҡарарға кәрәк. Ил халҡының йәмғиәт сәләмәтлегенең төп күрһәткестәрен баһалағанда беҙ төбәк үҙенсәлектәрен иҫәпкә алабыҙ (тәбиғәт, климат, экология, иҡтисади үҫеш кимәле, һаулыҡ һаҡлау торошо һ.б.). Был илебеҙҙең киңлегенән һәм күп төрлөлөгөнән сығып ҡарағанда, шулай булырға тейеш тә. Хатта бер күрһәткес динамикаһы ла ысынбарлыҡтағы хәл-торош тураһында фекер йөрөтөргә мөмкинлек бирмәй. Мәҫәлән, бер яҡтан, халыҡтың ауырыуы патологияның таралыуын, икенсе яҡтан, медицина ярҙамын һәр кем ала алыуҙы йәки ала алмауҙы күрһәтә. Шуға күрә халыҡтың сирләүе (дөйөм йәки айырым ауырыуҙар буйынса) бер нисек тә кире күренеш булараҡ ҡарала алмай.

2013 йылда "РИА Рейтинг" агентлығы тормош сифаты буйынса мәғлүмәт баҫтырҙы. Унда эксперттар "Халыҡтың сәләмәтлеге һәм белем кимәле" төркөмөн айыра. Был төркөмдә төбәктәрҙең рейтингы теркәлгән ауырыуҙар, беренсе тапҡыр асыҡланған сирҙәр, сабыйҙар үлеме, тыуған ваҡытта күҙалланған ғүмер оҙайлығы, 10000 кешегә аспирантура тамамлаусылар, 15 һәм унан оло йәштәге халыҡ һанына ҡарата юғары белемлеләр, 15 һәм унан оло йәштәгеләр араһында 1000 кешегә урта белеме булмаусылар күрһәткесе нигеҙендә баһалана. Рейтингта беренсе ун урында Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалалары, Мәскәү, Воронеж, Томск өлкәләре, Краснодар крайы, Ханты-Манси автономиялы округы - Югра, Калининград өлкәһе, Төньяҡ Осетия Республикаһы - Алания, Һарытау өлкәһе тора. Дөйөм алғанда, тормош сифаты рейтингының барлыҡ күрһәткестәре буйынса ла Мәскәү һәм Санкт-Петербург беренсе урында тора. Уларҙан ҡала Мәскәү өлкәһе, Татарстан Республикаһы, Краснодар крайы, Белгород, Воронеж өлкәләре, Ханты-Манси автономиялы округы- Югра, Төмән өлкәһе, Нижегород өлкәһе килә.

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# БЕРҘӘМ БУЛАЙЫҠ!

**Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең бер хәҙисендә "Берҙәм булығыҙ! Хәҡиәҡәттә бүре көтөүҙән айырылған һарыҡты ашай", тип әйтелә. Халҡыбыҙҙың да "Айырылғанды айыу ашар, бүленгәнде бүре быуыр", тигән тәрән мәғәнәле бер әйтеме бар. Ысынлап та, берҙәмлек темаһына дин талаптарында ла, халыҡ йолаларында ла мөһим роль бирелә. Был юҡҡа түгел. Сөнки иң ауыр һынауҙарҙы ла, иң ҡурҡыныс бәләләрҙе лә кешеләр бергә булғанда ғына үтә ала. Бары кеше менән аралашып йәшәү, айырымланмау бәлә-афәттәр килгәндә лә уларҙы еңел үткәреп ебәрергә мөмкинлек бирә.**



"Мөъминдәр бер-береһенә ҡарата йорт, бина һымаҡ, уларҙың бер өлөшө ҡалған өлөшөн нығытып, тотоп тора", ти Бәйғәмбәребеҙ бер хәҙисендә. Ә Ҡөрьән аятында "Ысынлап та, мөъминдәр - ҡәрҙәштәр", тип әйтелә. Мөхәммәт салаллаһу ғәләйһи үәссәләм: "Мосолман икенсе мосолманға ҡәрҙәш. Ул уны алдатырға, ҡыйынлыҡта ҡалдырырға йәки хыянат итергә тейеш түгел. Башҡа берәүҙең намыҫына, мөлкәтенә, ғүмеренә ҡул һуҙыу - хәрәм күкрәгенә һуға һәм "Әгәр берәү ҡәрҙәшен кәмһетһә, уның яманлығы етерлек булыр", тип тә өҫтәй.

Ләкин ҡәрҙәшлек, берҙәмлек кешеләр араһында бер-береһенә ышаныу, хөрмәт, мөхәббәт (киң мәғәнәлә) булғанда ғына мөмкин. Башҡа кешеләрҙе тиң итеп күрә белмәгәндә, уларҙың хоҡуҡтары менән иҫәпләшмәгәндә, мин-минлегең нәфсеңде уҙындырғанда ҡәрҙәшлек, берҙәмлек мөмкин түгел. Суфыйсылыҡтың төп принциптарының береһе "Бөтәһе лә Бәйғәмбәр өсөн, бөтәһе лә шәйех өсөн", тип яңғырай. Ошо принципты тормошона индергән мосолман уны "Бөтәһе лә ҡәрҙәшем өсөн", тип тағы ла киңәйтергә бурыслы.

Шундай бер миҫал. Бәйғәмбәр үҙенең эргәһендә ултырған сәхәбәләргә мөрәжәғәт итеп: "Хәҙер йәннәт эйәләренән булған берәү мәсеткә инәсәк", - тип белдерә. Ул өс көн дауамында ошо һүҙҙәрҙе әйтә һәм өс көнөндә лә бер үк кеше Аллаһ йортона килеп инә. Ғабдуллаһ ибн Әмир исемле сәхәбә мәсеткә ингән был кешенең нисек итеп Бәйғәмбәрҙең иғтибарын яулауы хаҡында белергә теләй. Ул "йәннәт эйәһе" артынан барып, әлеге ваҡытта йәшәргә урыны булмауы тураһында әйтә һәм унан бер нисә көнгә үҙ йортона индереп тороуын үтенә. Сәхәбә шулай итеп бер нисә көн дауамында йорт хужаһын күҙәтә. "Йәннәт эйәһе" мосолманға фарыз ғәмәлдәрҙе үтәй үтәүгә, әммә төндәр буйы намаҙ уҡыу, көн һайын ураҙа тотоу, көн дә саҙаҡа өләшеү кеүек Бәйғәмбәрҙең үҙенә генә хас ғәмәлдәрҙе лә үтәүен шәйләмәй. Ғабдуллаһ ибн Әмир түҙмәй, үҙенең хәйләһен асып бирә һәм ни өсөн Бәйғәмбәрҙең уны "йәннәт эйәлә-ренән" тип әйтеүен аңлатыуын һорай. Йорт хужаһы: "Мин башҡаларҙан бер нәмә менән дә айырылмайым", - тигәс, Ғабдуллаһ ибн Әмир боролоп, ишеккә табан йүнәлә. Йорт хужаһы: "Эйе, минең тормошом башҡаларҙыҡынан бер нәмәһе менән дә айырылмай, бәлки, Бәйғәмбәр минең йөрәгемдә кешеләргә ҡарата асыу, нәфрәт булмауын тойғандыр? Аллаһ биргән ниғмәт өсөн мин бер кемгә лә көнләшеп ҡарамайым", - тип өҫтәй. Ғабдуллаһ ибн Әмир: "Тап ошо сифатың һине юғары баҫҡыстарға күтәргән дә инде, сөнки күптәр өсөн был көстән килмәгән эш!"- тип шатланып ҡысҡырып ебәрә...

Эйе, хөсөт йәки ҡара көнләшеү, фани донъяны үтә ныҡ яратыу артығы менән кешеләр зиһенен яуланы һәм улар араһын үтә ныҡ алыҫайтты. Кешеләр үҙ янында булғандарҙың да зарын ишетмәҫ хәлгә килде. Ғаиләлә, йәмғиәттә, айырым дәүләттә, бар донъяла булған ҡәрҙәшлек ептәре өҙөлдө. Ике кеше араһындағы ғына түгел, дәүләттәр араһындағы бар аңлашылмаусанлыҡтар ошоноң эҙемтәһе лә инде.

**Мораҙым АЙСЫУАҠОВ әҙерләне.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

*Уҡыуға һәм тыңлауға, һөйләүгә ҡарағанда 10 тапҡырға артығыраҡ ваҡыт бүлегеҙ. Бының менән һеҙ һәр ваҡыт уҡыуығыҙҙы һәм камиллашыуығыҙҙы гарантиялайһығыҙ.*
***Джералд Макгиннис, Respironics фирмаһының генераль директоры һәм президенты***

*Үҙегеҙ белгәндән һуң да нимәгәлер өйрәнеүегеҙ ысынлап та мөһим.*
***Джон Вуден, баскетбол буйынса тренер.***

**Уҡыуға һәләт: лидер булыу өсөн, уҡыусы булып ҡалығыҙ**

Лидерҙар алдында һәр саҡ яуланған статус-кво менән ҡәнәғәтләнеү хәүефе тора. Әгәр лидерҙың йоғонтоһо бар, ул ихтирам ҡаҙанған икән, нимәгә уға артабан шәхси үҫешен дауам итергә? Яуап ябай:

- Үҫеү кимәлегеҙ кем икәнлегегеҙҙе асыҡлай.
- Кем булыуығыҙ эргәгеҙгә кемдәрҙе тартыуығыҙҙы билдәләй.
- Кемде ылыҡтырыуығыҙ ойошмағыҙҙың уңыш кимәлен билдәләй.
- Әгәр ойошмағыҙҙың үҫеүен теләһәгеҙ, уҡыу һәләтен һаҡларға тейешһегеҙ.

**Белем алыуға һәр саҡ әҙер булыу көйләнешен үҫтереү һәм һаҡлау өсөн ошо биш принципҡа таянырға кәрәк:**

**1. Үҙ-үҙегеҙ менән ҡәнәғәт булыу сиренән дауаланығыҙ**. Нисек кенә сәйер булмаһын, белем алыуға тейешенсә әҙер булмау бик йыш яуланған ҡаҙаныштарҙа тамырлана. Бәғзеләр аныҡ һәм еңел булмаған маҡсатҡа өлгәшкәс, артабан үҫергә кәрәкмәй, тип, хата фекер йөрөтә. Ҡаҙаныш, тип, бындай кешеләр бөтөн нәмәне иҫәпләй ала: диплом йәки ғилми дәрәжә, күптән көткән вазифаны биләү, ниндәйҙер награда йәки премия алыу, ниндәйҙер финанс маҡсатын тормошҡа ашырыу һ.б.

Әммә йоғонтоло лидерҙар үҫеүҙән туҡтаған көндән үк үҙҙәренең һәм ойошмаларының потенциалын ергә күмә. Рей Крондың һүҙҙәрен иҫегеҙҙән сығармағыҙ: "Йәшел саҡта, һеҙ үҫеүегеҙҙе дауам итәһегеҙ. Өлгөрөп еткәс, серей башлайһығыҙ".

**2. Уңышығыҙҙы еңә белегеҙ.** Белем алыуға әҙерлеккә ҡамасау булып, ғәҙәттә, уңыш тора. Йоғонтоло лидерҙар ошо кимәлгә күтәрелеү мөмкинлеге биргән алым бейеклектә мәңгегә ҡалыу мөмкинлеген бирмәйәсәген яҡшы аңлай. Әгәр үткәндәрҙә уңыш ҡаҙанғанһығыҙ икән, һаҡ булығыҙ. Әммә шуны онотмағыҙ: кисә башҡарған эшегеҙ бөйөк булып күренһә, бөгөн тағы ла яҡшыраҡ ниҙер эшләргә тейешһегеҙ.

**3. Туранан йөрөмәҫкә һәм мөйөштәрҙе киҫмәҫкә үҙегеҙгә һүҙ бирегеҙ**. Нэнси Дорнан: "Ике нөктә араһындағы иң алыҫ ара - тура һыҙыҡ", - ти. Был ысынлап та шулай. Тормоштағы иң ҡиммәтле нәмәләр өсөн беҙгә ҙур хаҡ түләргә тура килә. Әгәр ниндәйҙер аныҡ өлкәлә үҫергә теләйһегеҙ икән, бының өсөн нимә эшләргә, ниндәй хаҡ түләргә кәрәклеген алдан иҫәпләгеҙ һәм уны тулыһынса түләгеҙ.

**Джон МАКСВЕЛЛ.**



## 3 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Хортон". Худ. фильм.
08.00 "Приходите завтра..." Худ. фильм.
10.00 Новости (с субтитрами).
10.10 "Лермонтов". Сериал.
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Дело было в Пенькове". Худ. фильм (12+).
14.10 "Полосатый рейс". Комедия (12+).
15.50, 18.15 "Голос. Дети". Лучшее.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Красотка". Мелодрама (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Улыбка пересмешника". 1-я и 2-я серии. Мелодраматический сериал (16+).
23.20 "Александр Градский. Обернитесь!" (12+).
00.25 "Лицо со шрамом". Сериал (16+).
043.30 "В наше время" (12+).
04.40 "Россия от края до края".

### РОССИЯ 1

05.55 "Как же быть сердцу". Худ. фильм (16+).
08.05 "Одинокие сердца". Сериал (12+).
12.00, 14.20 "Ключи от прошлого". Мелодраматический сериал (12+).
14.00, 20.00 "Вести".
20.30 "Поддубный". Биографическая драма (6+).
23.00 "Трава под снегом". Мелодраматический (12+).
02.50 "Устрицы из Лозанны". Худ. фильм (16+).
04.20 "Моя планета представляет". "Мастера", "Чудеса России" (12+).
05.25 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Хазина" (6+)
20.00 "Тәмле" (6+)
21.00 "Кис ултырып". Гөлдәр Ишҡыуатова (6+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (6+).**
**07.05, 12.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 Мультфильм.**
**09.30 "Современник" (6+).**
**10.00 , 11.15 Новости недели (на башк. яз.) (16+).**
**10.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Городок АЮЯ".**
**11.00, 06.45 "Замандаш" (6+).**
**12.00, 02.15, 05.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**12.45 "Детский "Баик" (12+).**
**16.00 "Мой манифест" (6+).**
**16.30 "Историческая среда" (6+).**
**17.00 "Юные виртуозы Уфы".**
**17.45 "Птица счастья". Сериал (12+).**
**19.15 "Кружевное облако".**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Вопрос+Ответ=Портрет".**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**21.00 "Дознание" с Ильдаром Исангуловым (16+).**
**21.30 Новости (на русск. яз.) (16+).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**23.00 "Время спорта" (6+).**
**23.30 "Шпион по-соседству". Худ. фильм. По окончании: Новости (на башк. яз.). (12+).**
**01.30 "Тайный код взломан. Параллельный мир" (16+).**
**02.45 С.Латыпов, Х.Фатихова. "Завидуй, Америка, завидуй". Спектакль (12+).**
**05.30 "Мелодии души" (12+).**
**06.15 "Орнамент".**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 4 НОЯБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Россия от края до края".
07.00 "Кубанские казаки". Худ. фильм.
09.00 "Флаг. Символ преемственности".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.10 "Улыбка пересмешника". Сериал (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Королева бензоколонки". Комедия.
13.40 "Три плюс два". Комедия.
15.20 "Весна на Заречной улице". Мелодрама (12+).
17.10, 18.15 "Голосящий КиВиН". Музыкальный фестиваль (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.30 "Улыбка пересмешника". 3-я и 4-я серии (12+).
23.20 "Вечерний Ургант" (16+).
23.55 "Прима из клана сопрано" (12+).
01.00 "Влюбленный Шекспир". Худ. фильм.
03.15 "В наше время" (12+).
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

06.35 "Как же быть сердцу-2". Худ. фильм (16+).
08.35 "Снежная королева". Полнометражный мультипликационный фильм.
09.55, 14.20 "Пенелопа". Мелодраматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
17.50 "Петросян-шоу". Юмористическое шоу (16+).
20.00 "Вести".
20.30 "Солнечный удар". Драма (12+).
23.55 "Ящик Пандоры". Мелодраматический сериал (16+).
03.45 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Автограф". Рафаель Аҙнағолов (6+)
20.00 "Дарман" (6+)
21.00 "Кис ултырып". Миңзифа Исҡужина (6+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (6+).**
**07.05, 12.30 Новости (12+).**
**07.15, 05.15 "Мы дружбой единой сильны!" (12+).**
**08.30 Мультфильм.**
**10.00 "Сәләм!" (12+).**
**11.00, 06.45 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 12.45, 13.00, 06.30 "Орнамент".**
**11.30, 22.00 "Историческая среда" (6+).**
**12.00, 14.00, 02.15 "Үткән ғүмер" (12+).**
**13.15 "Аксаковская осень" (6+).**
**14.30 "Башкорттар".**
**15.00 "Проект Благотворительного фонда "Мархамат".**
**16.00 "Послесловие" (6+).**
**16.30, 17.45 "Телецентр" (12+).**
**17.30 "Специальный репортаж" (12+).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. Трансляция из Москвы (12+).**
**21.30 Новости (на русск. яз.) (12+).**
**22.30 Новости (на башк. яз.) (6+).**
**23.00 "Лестница в небо" (12+).**
**23.30 "Законы привлекательности". Худ. фильм. По окончании: Новости (на башк. яз.) (12+).**
**01.30 "Тайный код взломан. Код Джокера" (16+).**
**02.45 Н.Асанбай. "Красный Паша". Спектакль (12+).**

## 5 НОЯБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Улыбка пересмешника". Сериал (12+).
14.20, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 03.05 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 02.10 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Улыбка пересмешника". 5-я и 6-я серии (12+).
23.25 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
00.15 "Политика" (16+).
01.20 "Мотель Бейтс". Сериал (18+).
03.00 Новости.
04.00 "В наше время" (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Провал Канариса" (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (12+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Каменская-6". "Пружина для мышеловки". 1-я серия (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Сын за отца". Криминальная драма. Часть 1 (16+).
00.45 "Дежурный по стране". Михаил Жванецкий.
01.45 "Улицы разбитых фонарей" (16+).

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Замандаштар". Нажиб Асанбаев (6+)
15.00 Венер Камалов йырлай (6+)
21.00 "Кис ултырып". Ғәзим Ильясов (6+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (6+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильм.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00, 16.15, 06.45 "Современник" (6+).**
**11.15, 06.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.) (0+).**
**11.45, 04.45 "Спасти босса". Сериал (12+).**
**12.30, 18.30, 22.30 Новости (12+).**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бэхетнэмэ".**
**13.45 Детский "Баик".**
**13.30, 14.30 Новости.**
**13.45, 05.30 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учим башкирский язык".**
**14.45 "Тәмле. Ян и Зиля Лира" (12+).**
**15.15 "Физра" (6+).**
**15.45 "Шатлык йыры".**
**16.00 "Борсаҡ".**
**16.45 "Здоровое решение" (12+).**
**17.15 Позывной "Барс" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Птица счастья". Сериал (12+).**
**18.45, 20.00 "Телецентр" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**21.00 "Полезные новости".**
**21.15 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Автограф" (6+).**
**23.30 "Старое предание. Когда солнце было богом". Худ. фильм. По окончании: новости (12+).**
**01.45 "По ту сторону света" (12+).**
**02.45 Н.Гаитбаев. "Сердце не стареет". Спектакль (12+).**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 6 НОЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Улыбка пересмешника". Сериал (12+).
14.20 "Время покажет".
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00, 03.05 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 02.10 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Улыбка пересмешника". 7-я и 8-я серии (12+).
23.25 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
00.15 "На ночь глядя" (16+).
01.15 "Мотель Бейтс". Остросюжетный сериал (18+).
03.00 Новости.
04.00 "В наше время" (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.05, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия".
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Каменская-6". "Пружинка для мышеловки". 2-я серия (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Сын за отца". Часть 2 (16+).
00.45 "Забытый вождь. Александр Керенский". Док. фильм (12+).
01.45 "Улицы разбитых фонарей". Сериал (16+).

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Ҡуш беләҙек" (6+)
21.00 "Кис ултырып". Ишморат Илбәков (6+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (6+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильм.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Царь горы".**
**11.00, 16.15, 06.45 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 06.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45, 04.45 "Спасти босса". Сериал (12+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Башҡорт йыры-2014" (12+).**
**14.45 "Үткән ғүмер" (12+).**
**15.15 "Шәп арба".**
**15.45 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.00 "Семәр".**
**16.45 "Алтын тирмә".**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Птица счастья". Сериал (12+).**
**18.45, 20.00 "Телецентр" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**21.00 "Наука 102" (12+).**
**22.00 "Аль-Фатиха".**
**23.00 "ФК "Уфа" - наша команда!"**
**23.30 "Быть Флинном".**
**01.45 Документальный фильм (12+).**
**02.45 Р.Киньзябаев. "А Торатау и ныне там". Спектакль (12+).**
**05.30 "Мелодии души" (12+).**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 7 НОЯБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Улыбка пересмешника". Сериал (16+).
14.20, 15.15 "Время покажет".
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское".
17.00 "Жди меня" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Музыкальный конкурс (12+).
23.35 "Вечерний Ургант".
00.30 "В поисках сахарного человека". Док. фильм (12+).
02.10 "Елизавета: золотой век" (16+).
04.15 "Наедине со всеми" (16+).
04.20 "В наше время" (12+).
05.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России".
06.10, 06.35, 07.10, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
08.55 "Мусульмане".
09.10 "От всей души".
10.05 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (12).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести - ПФО".
17.30 "Каменская-6". "Реквием". 1-я серия (16+).
18.30 "Прямой эфир".
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Дождаться любви". Мелодрама (12+).
00.40 "Приказано женит". Комедия (16+).
02.50"Горячая десятка" (12+).
03.55 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Йома" (0+)
20.00 "Рампа" (6+)
21.00 "Кис ултырып". Редик Ефремов (6+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан.**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильм.**
**10.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**11.00, 16.15, 06.45 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 17.45, 06.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45, 04.45 "Спасти босса". Сериал (12+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости.**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бэхетнэмэ".**
**13.45 "Учим башкирский язык".**
**14.45 "Автограф" (6+).**
**15.15 "Зеркальце".**
**15.30 "Гора новостей" (6+).**
**15.45 "Сулпылар".**
**16.00 "Байтус" (6+).**
**16.45 "ФК "Уфа" - наша команда!" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости экономики (16+).**
**18.00 "Йома".**
**18.45, 20.00 "Телецентр" (12+).**
**19.45 "Сэнгелдэк".**
**21.00 "Полезные новости".**
**21.15 "История признания" (6+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Уфимская волна" (12+).**
**23.45 "Грех". По окончании: Новости (на башк. яз.) (18+).**
**01.45 Документальный фильм (16+).**
**02.30 Ф.Асянов. "Вдова" (12+).**
**05.30 "Мелодии души" (12+).**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 8 НОЯБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.35, 06.10 "В наше время" (12+).
06.00 Новости.
06.35 "За двумя зайцами".
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Всем миром". "Новоселье" (12+).
11.15 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "В наше время" (12+).
14.30 "Голос" (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Голос". Продолжение (12+).
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Ледниковый период".
21.00 "Время".
21.30 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.10 "Принцесса Монако". Биографическая драма (16+).
01.00 "Шальные деньги: роскошная жизнь" (12+).
03.20 "Любовь вне правил" (16+).
05.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.35 "Самый последний день".
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Военная программа" Александра Сладкова.
08.50 "Планета собак".
09.25 "Субботник".
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Вести. Дежурная часть".
11.55 "Честный детектив".
12.25, 14.30 "Не отпускай меня" (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
16.10 "Субботний вечер".
18.05 "Полцарства за любовь". Мелодрама (12+).
20.00 "Вести в субботу".
20.45 "Сон как жизнь". Сериал (12+).
00.35 "Жила-была любовь". Мелодрама (12+).
02.35 "Был месяц май".
04.55 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Дуҫтар сәләме". Концерт (6+)
19.00 "Уңыш джентельмендары". Фильм (6+)
21.00 "Кис ултырып". Рөстәм Ғиззәтуллин (6+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (6+).**
**07.05, 12.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 Мультфильм.**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (12+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**12.00 "Следопыт".**
**12.45 "Учу башкирский язык".**
**13.30 "Орнамент" (6+).**
**13.45, 19.30 "Весело живем" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (0+).**
**16.00 "Баик-2014".**
**17.00, 04.30 "Московские гастроли Башкирского академического" (12+).**
**17.30 "Сердце" (12+).**
**18.15 "Хазина".**
**18.45, 06.45 "Замандаш" (6+).**
**19.00 "Башкорттар".**
**19.45 "Сэнгелдэк".**
**20.00 "Башкорт йыры" (6+).**
**20.30 "Живое село".**
**21.00 "Послесловие" с Азаматом Саитовым (12+).**
**21.30 Новости (на русск. яз.).**
**22.00 "Попкорм" (16+).**
**22.30 Новости (на башк. яз.) (16+).**
**23.00 "Башҡорт йыры представляет…" (12+).**
**23.45 "Странный город" (12+).**
**00.45, 04.45 "Мебиус". Худ. фильм (16+).**
**02.30 Спектакль (12+).**

## 9 НОЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Лысый нянька: спецзадание". Худ. фильм (16+).
08.10 "Служу Отчизне!".
08.45 "Смешарики". "Пин-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Александра Пахмутова. "Светит незнакомая звезда" (16+).
13.15 "ДОстояние РЕспублики".
15.25 "Черно-белое" (16+).
16.30 "Большие гонки" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Своими глазами" (16+).
18.50 "Театр эстрады" (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Толстой. Воскресенье" (16+).
23.30 Бокс. Бой за титул чемпиона мира. Сергей Ковадев - Бернард Хопкинс.
00.30 "Рожденный четвертого июля" (16+).
03.10 "В наше время" (12+).
04.20 "Контрольная закупка" (12+).

### РОССИЯ 1

05.35 "Человек, который сомневается". Худ. фильм (12+).
07.20 "Вся Россия".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.55 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Россия. Гений места" (12+).
12.10 "Жених". Мелодрама (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
16.20 "Сводная сестра". Драматический сериал (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
23.50 "Я смогу!" Развлекательное шоу (16+).
03.10 "Моя улица".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит" (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
16.00 "Килә яуа". Спектакль (6+)
20.00 "Рампа" (6+)
21.00 "90-сылар дикотекаһы". Концерт (6+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (6+).**
**07.05 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома".**
**08.30 "Автограф" (12+).**
**09.00 Мультфильмы.**
**10.00 "Физ-ра".**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Шәп арба" (6+).**
**11.15 "Байтус" (6+).**
**11.30 "Сулпылар".**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле".**
**13.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (0+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30, 00.15 "Автограф" (6+).**
**17.00 "Историческая среда".**
**17.30 "Наука 102" (12+).**
**18.00 "История признания" (6+).**
**18.15 "Звездная академия" (12+).**
**18.45 "Замандаш" (6+).**
**19.00 "Весело живем" (12+).**
**19.15 "Любимое дело" (12+).**
**19.30, 00.45 "Кука" (12+).**
**21.15 "Полезные новости" (12+).**
**21.30 Новости недели (12+).**
**22.15 "Специальный репортаж" (16+).**
**22.30 "Баик-2014" (6+).**
**23.30 "Вечер.com".**
**02.30 В.Шкварик. "Чужой ребенок". Спектакль (12+).**
**04.45 "Ванга. Мир видимый и невидимый" (12+).**
**05.45 "Попкорм".**
**06.15 "Уфимская волна-2014" (12+).**

✓ *Тау башындағы тәкәгә тау аҫтындағы арыҫлан сәләм бирер.*
*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ХОҘАЙҘЫ ОЛОЛАП НИ ТИҺЕҢ?




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

КОТЛАЙБЫҘ!

Октябрь айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Белорет районы** Шығай ауылынан Гөлсинә Сәхәүетдинова, Уҫманғәле ауылынан Зөһрә Мырҙағәлина, **Ейәнсура районы** Абзан ауылынан Гөлназ Йылкыбаева, Малай Муйнаҡ ауылынан Рөстәм Аҫылбаев, **Архангел районы** Тирәкле ауылынан Әлфирә Баһаутдинова, Архангел ауылынан Резида Мәликова, М. Горький ауылынан Хәмдиә Юльякшина, **Учалы районы** Ҡолош ауылынан Шәрифә Хажина, **Дүртөйлө районы** Семилетка ауылынан Люция Әглетдинова, Иванай ауылынан Миләүшә Мәһҙиева, Түбәнге Мансар ауылынан Рәзинә Ғәлиева, **Янаул ҡалаһынан** Гүзәл Вәсбиева, **Янаул районы** Ҡарман ауылынан Рәйсә Һайрамова, **Благовар районы** Өйҙәрәкбаш ауылынан Эльза Бәширова, Ямаҡай ауылынан Мәрзиә Батыраева, **Ҡалтасы районы** Ҡалтасы ауылынан Нәрисә Зөбәйерова, Фәйсүнә Ғәлиева, **Бишбүләк районы** Бишбүләк ауылынан Вәлмирә Ғатауллина, **Балтас районы** Боғҙан ауылынан Фәридә Аҫҡарова, Иҫке Балтас ауылынан Гөлназ Әнүәрова, Ингир Хамаев, **Шаран районы** Ҡыр-Теләүле ауылынан Ғәлиә Ғабдуллина, Регина Фәррәхова, **Межгорье ҡалаһынан** Йомаҙиә Хәйруллина, **Баймаҡ районы** Темәс ауылынан Байрас Яҫыбаев, Ярат ауылынан Хәмиҙә Исчурина, Миңлеәхмәт Ғәзелшин, **Ауырғазы районы** Исмәғил ауылынан Фәнилә Сиражетдинова, Таштамаҡ ауылынан Нәсимә Сидорова, Мораҙым ауылынан Раян Мырҙабаев, Фәһимә Дилмөхәмәтова, **Өфө ҡалаһынан** Әлиә Мәсәлимова, Марс Кәримов, **Миәкә районы** Елдәр ауылынан Дилбәр Ғилметдинова, **Ғафури районы** Курорт ауылынан Гөлназ Әбелғужина, Үтәк ауылынан Роза Юлмөхәмәтова, Ҡормантау ауылынан Маһира Муллағәлиева, **Мәләүеҙ районы** Смак ауылынан Нурия Байгилдина, **Федоровка районы** Татар Ҡоро Иҙәге ауылынан Разидә Мәхмүтова, Бала Сытырман ауылынан Рәйфә Вәлиева, **Бәләбәй ҡалаһынан** Гүзәл Иманголова, **Благовещен ҡалаһынан** Әлфинә Мәхмүтова, **Күгәрсен районы** Мораҡ ауылынан Юлай Ҡыҙрасов, Хөбәйбә Әҙелғужина, Зилә Мөхәмәтова, Мәрйәм Ишкилдина, **Стәрлетамаҡ ҡалаһынан** Нурсилә Сөләймәнова, **Стәрлетамаҡ районы** Октябрь ауылынан Гөлфиә Ғибәдуллина, Ҡусәрбай ауылынан Гәйнетдин Ишәйев, **Йылайыр районы** Юлдыбай ауылынан Миләүшә Моратова, Ҡашҡар ауылынан Яңыбикә Баязитова, Яманһаҙ ауылынан Зөлфиә Ҡудашева, **Иглин районы** Красный Восход ауылынан Әдис Зәкиров, **Хәйбулла районы** Әбүбәкер ауылынан Гөлзиә Билалова, Рәсимә Әбүбәкерова, Федоровка ауылынан Мәрйәм Ҡужина, **Өфө районы** Николаевка ауылынан Мөхәммәт Ҡолдәүләтов, Йоматау ауылынан Гөлдәр Искужинаны ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Гәзитебеҙҙең яҡын дуҫтарына алдағы көндәрҙә лә именлектә, байлыҡта, муллыҡта йәшәүҙәрен теләйбеҙ. Хоҙай Һеҙҙе күңел тыныслығынан, һаулыҡтан, донъя ҡыуаныстарынан айырмаһын.

**Изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

**43-сө һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Мөнәсәбәт. Публицистика. Эшләпә. Тутыя. Денди. Каркаде. Рулон. Авангард. Киҫкә. Мостафина. Тапир. Вәссәләм. Энә. Ниса. Ноҡ. Шәрипова. Кесерткән. Абрис. Карантин. Иңкеш. Этап. Болгар. Гәрәева. Йыуата. Хәтирә. Ҡунафин. Раут. Иҙелбаев. Игрек. Майҙан. Лирика. Мамонт. Арал.

**Вертикаль буйынса:** Эйәк. Күстәнәс. Келәт. Ҡурғаш. Кәфен. Эргә. Иләк. Пуэр. Декада. Нәсәп. Әтрәгәләм. Милтә. Антик. Әхирәт. Әсир. Март. Трал. Айбалта. Йыла. Блицтурнир. Укра. Янбаев. Шешәк. Вандал. Әлбә. Аласаҡ. Рупор. Насыри. Аламан. Питон. Лото. Триумф. Манара. Никсон.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**1 ноябрҙә** филармонияла **"Ҡыҙыҡ менән мәҙәктәр"** эстрада театры солистары Хәмит Тләмов менән Ғәлиә Тимербулатованың бенефисы үтәсәк. Был артистар сағыу образдары, ҡыҙыҡлы пародиялары, интермедиялары аша танышып тамашасыға.

**Кем алыҡ?**

"Ҡыҙыҡ менән мәҙәктәр" эстрада театры етәксеһенең исемен атап, ошо тамашаға саҡырыу ҡағыҙы ота алаһығыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар. Яуаптарҙы 8-927-956-68-89 номерына шылтыратып әйтергә кәрәк.

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**1 ноябрь "Әбейүшкә"@эт тущка.ru** (Р.Кинйәбаев), заманса комедия

**2 ноябрь "Ер менән Күк араһында"** (Т.Ғиниәтуллин, Р.Кинйәбаев), өндәге күрәҙәлек

**3 ноябрь** Сибай дәүләт филармонияһы концерты

**4 ноябрь "Бәхет хаҡы"** (Х.Мөҙәрисов), музыкаль мелодрама

**5 ноябрь "Хыял диңгеҙе"** (Ф.Буләков), комедия

**6 ноябрь "Хыялый"** (С.Әбүзәров), лирик комедия

**7 ноябрь "Ғәфү ит мине!"** (И.Герман), мелодрама

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1435 һижри йыл.*

| Ноябрь (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 3 (10) дүшәмбе | 6:54 | 8:24 | 13:30 | 16:04 | 17:34 | 19:04 |
| 4 (11) шишәмбе | 6:56 | 8:26 | 13:30 | 16:02 | 17:32 | 19:02 |
| 5 (12) шаршамбы | 6:58 | 8:28 | 13:30 | 16:00 | 17:30 | 19:00 |
| 6 (13) кесе йома | 7:00 | 8:30 | 13:30 | 15:58 | 17:28 | 18:58 |
| 7 (14) йома | 7:02 | 8:32 | 13:30 | 15:56 | 17:26 | 18:56 |
| 8 (15) шәмбе | 7:04 | 8:34 | 13:30 | 15:54 | 17:24 | 18:54 |
| 9 (16) йәкшәмбе | 7:06 | 8:36 | 13:30 | 15:52 | 17:22 | 18:52 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙән алынды.*

*КИТАБЕННАС*

# БАЛАЛАРҒА ҠЫУАНЫС АРТТЫРЫП...



**Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә йыл да балалар өсөн бихисап китап нәшер ителә. Быйыл һатыу кәштәләренә сығарылған балалар баҫмалары, һис шикһеҙ, китап һөйөүселәр өсөн матур бүләккә әйләнәсәк.**

**Зәһит Мурсиевтың** быйыл **"Алтын ҡурай"** тип исемләнгән китабы донъя күрҙе. Ул төрлө гәзит-журналдарҙа баҫылған хикәйәләре менән уҡыусыларға күптән таныш. Авторҙың әҫәрҙәре ихласлығы менән арбай, төп тема - кеше күңеле, йәшәү мәғәнәһе. Йыйынтыҡҡа мәктәп йәшендәге балалар өсөн фәһемле йөкмәткеле хикәйәләре һәм әкиәттәре тупланған.

**Таңсулпан Ғарипованың "Сыҫҡансыҡ менән Сыҫҡансуҡ мажаралары"** тип исемләнгән китабында ваҡиғалар сыҫҡандар донъяһында бара. Сыҫҡанбай менән Сыҫҡанбикәнең тиктормаҫ балаларының мауыҡтырғыс мажаралары тасуирлана унда.

**Гөлсинә Йосопованың "Һөйләшә белгән кәнфит"** тигән тәүге китабы сыҡты. Автор кескәй балаларҙы тәрбиәләгәндә килеп сыҡҡан төрлө хәл-ваҡиғаларҙы үҙенсәлекле итеп тасуирлай, проблемалар һәм уларҙы хәл итеү юлдарын эҙләй.

**Шәүлиә Зөлҡәрнәева "Алма бабай һабаҡтары"** китабын ике һуғышта ҡатнашҡан, тормоштоң әсеһен-сөсөһөн күп татыған, оло йөрәкле уҡытыусы, йомарт күңелле атаһының яҡты иҫтәлегенә арнай. Хәтирәләре һәм ул ҡалдырған тормош һабаҡтарын автор уҡыусылары менән уртаҡлаша. Унда йәш быуынға тормошта дөрөҫ йүнәлеш бирерҙәй фәһемле әҫәрҙәре урын алған.

Балалар яҙыусыһы, Шәйехзада Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһы лауреаты **Зөлфиә Күскилдина "Ҡуян баҙарҙа нисек бүре һатҡан"** китабына кесе һәм урта мәктәп йәшендәге балалар өсөн хикәйә һәм әкиәттәре индерелде. Автор художество саралары ярҙамында бала белергә һәм аңларға тейешле хәл-күренештәрҙе нескә итеп еткереү оҫталығына эйә. Әҙибә кешеләр һәм беҙҙе уратып алған донъя хаҡында, кескәйҙәр һәм ололар араһындағы мөнәсәбәттәр тураһында мауыҡтырғыс мажаралар уйлап сығара. Әҫәрҙәрҙең теле бай һәм шиғриәтле. Башҡорт һәм рус телендә донъя күргән баҫманың рус теленә тәржемәсеһе Николай Андреев.

Билдәле башҡорт яҙыусыһы **Гүзәл Ситдиҡованың "Ҡолонсаҡ - арғымаҡ булыр бер саҡ"** тигән яңы китабында мәктәпкәсә йәштәге һәм мәктәп йәшендәге балаларға тәғәйенләп ижад ителгән шиғырҙар, әкиәттәр, хикәйәләр урын алған. Китаптағы һәр әҫәргә төшөрөлгән сағыу, мауыҡтырғыс һүрәттәр уҡыусыны үҙенә тартып, әҫәр йөкмәткеһен тулыландырып тора. Мәҫәлән, "Аҡ дөйә һәм Асмандың сүллектәге мажаралары" әкиәте фантастик сюжетка ҡоролған. Ҡомда уйнап йөрөгән бәләкәй малай Асман ҡапыл йәнһүрәт геройына әүерелә һәм китабындағы Нарымбай исемле дөйә менән сүллеккә барып эләгә. Әҫәр барышында Асман Аман исемле малай менән таныша. Ул уға сүллек тураһында һөйләһә, ә Асман тыуған ере Башҡортостан менән таныштыра. Хәл-ваҡиғалар әҫәрҙә киҫкен үҙгәреш алып уҡыусыларҙы сәйәхәт иленә алып китә. Китап тәрбиәселәр, уҡытыусылар өсөн дә кәрәкле ҡулланма булмаҡсы. Һығылмалы матур образлы тел менән ижад ителгән шиғырҙар еңел генә ятланып, йырлап торғандай.

Шағирә **Әнисә Таһированың "Шәпәй менән Шайтан"** тигән китабы баҫылып сыҡты. Китапта "Бала саҡтың ике хәтирәһе" элегияларында һәм "Әлиәнең хыялы" хикәйәһендә һуғыш осоронда тыуған балаларҙың тормошо, йәшәү рәүеше бәйән ителә. "Шәпәй менен Шайтан" тигән замана әкиәтендә хәҙерге заманда балаларға янаған иң ҙур ҡурҡыныс - наркомания хаҡында һүҙ бара. Бында шулай уҡ бер нисә сит ил яҙыусыһының әҫәре автор тәржемәһендә бирелгән.

Балалар һәм үҫмерҙәр әҙәбиәте редакцияһы мөдире Әлфиә Әсәҙуллина билдәләүенсә, бүлектә төрлө йәштәге балалар өсөн нәфис-әҙәби баҫмалар сығарыуға иғтибар бүленә. Быйыл донъя күргән китаптар араһында бәләкәстәр өсөн "Таңбатыр" панорамалы китабы ла бар. Ылыҡтырғыс матур күләмле һүрәттәр, ҡыҙыҡлы әкиәт донъяһы көтә кескәйҙәрҙе. Шулай уҡ быйыл 75 йәшлек юбилейын билдәләгән балалар шағиры Рәшит Зәһиҙуллиндың "Уйнай йәйғор төҫтәре" һәм БДУ студенты Динара Кәримованың "Белгем килә бөтәһен" тигән рәсемдәрҙе буяу китаптары сыҡты. Динараның китабы ижекләп уҡырға өйрәнеүсе балаларға ла бик кәрәкле ҡулланма булмаҡсы.

**Нәркәс КҮРПӘСОВА әҙерләне.**

*ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ*

## БЕЛГӘН ЙОҪОҠҠА, ОНОТОП БАРАБЫҘ...

**Беҙҙең Салауат районында йәшәгән башҡорттар һөйләшендә урын алған ҡайһы бер һүҙҙәр:**

**Хишараты әйҙәнгән** - ҡарағыһыҙ, ҡурҡыныс, йәмһеҙ булып үҙгәргән

**Хишарат булып (йәшәй)** - бысраҡ, йыйыштырмай йәшәгән, булдыҡһыҙ кешене ғәйепләп әйтелә

**Шараҡтатып яуҙы** - ҡойоп яуған ямғырҙы әйтәләр

**Шыпрахош** - бер нәмәһеҙ тороп ҡалыу (бур төшһә, донъяһын эсеп туҙҙырған кеше хаҡында һөйләгәндә)

**Күлпелтеп** - ашты һәйбәт итеп, еренә еткереп бешергәндә; яңы һауылған һөт хаҡында ла шулай тип әйтәләр

**Һылталана** - кемгәлер, нимәгәлер япһарыу

**Ыңғырсаҡ** - ат егеү ҡаралдыһы (һыбай ултырғанда, аяҡты терәп йөрөр өсөн хеҙмәт иткән ҡулайлама)

**Хәсис** - яман, дошман

**Ҡымшанмай ҙа** - иҫе лә китмәй, уйында ла юҡ

**Аңшайған** - иҫе китеп тик тора

**Һаптысай** - кәстрүл йәиһә һаплы һауыт-һаба (Мәстүрә ҡәртнәйем шулай ти торғайны)

**Миңһылыу АБДУЛЛИНА.**
**(Дауамы бар).**

*АТЫҢ КЕМ?*

## АРЫҪЛАН БАТЫР



Силәбе өлкәһенең Магнитогорск ҡалаһында йәшәүсе был шәп башҡорт егете Арыҫлан Йәһүҙин булыр. Исеменә күрә - есеме, тигәндәй, ул бик ҡыйыу һәм етди. Холҡондағы бер аҙ еңмешлеге үҙе теләгән нәмәләргә өлгәшергә ярҙам итә. Аҡыллы, үҙенән бәләкәйҙәрҙе яҡлап, ҡарап ҡына йөрөтә. Яратҡан хоккей командаһы "Металлург"-тың матчтарына йөрөргә, уларға дәрт өҫтәп, ҡысҡырып ултырырға ярата. Йырлай, бейергә, һүрәт төшөрөргә лә оҫта.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## АТА-ИНӘ БЕРҘӘМ БУЛҺА...

### балалары күндәм була

Тау башындағы тәкәгә тау аҫтындағы арыҫлан сәләм бирер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер хаким донъя ҡуя һәм уны ожмах ҡапҡаһы алдында апостол ҡаршы ала:**

**- Ожмахҡа рәхим ит, хаким, - ти ул. - Тик, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, һеҙҙе бында индергәнгә тиклем бер мәсьәләне хәл итергә кәрәк. Беләһегеҙме, һеҙҙең кеүек юғары дәрәжәләге хакимдың ожмахҡа эләгеүе бик һирәк осрай торған хәл, шуға ла беҙ аптырандыҡ-аптырандыҡ та, шулай тип хәл иттек: мәңгелегегеҙҙе ҡайҙа үткәрәсәгегеҙҙе үҙегеҙ һайлағанға тиклем беҙ һеҙҙе бер көн ожмахта, бер көн тамуҡта тотоп алырға булдыҡ...**

**Шулай ти ҙә апостол, хакимды лифт менән тамуҡҡа алып төшә. Лифт асылғас, хакимдың күҙ алдында сағыу йәшел төҫтәге йәйрәп ятҡан гольф яланы пәйҙә була. Бына уның ҡаршыһына ҡасандыр бергә эшләгән, бергә йәшәгән сәйәсмән дуҫтары йүгереп килә, улар шатланып ҡосаҡлашалар, күрешәләр, халыҡ иҫәбенә байыған, балдамайҙа йөҙгән саҡтарын иҫкә төшөрәләр. Шунан гольф уйнай башлайҙар, эргәләге клубҡа инеп, бай табын артында һыйланалар. Матур кеше ҡиәфәтендәге Шайтан да улар менән бергә күңел аса. Хаким шул тиклем күңелле үткәрә бындағы ваҡытты, китер саҡ килеп еткәнен дә һиҙмәй ҡала.**

**Бына лифт хакимды тағы өҫкә, ожмах ҡапҡаһына алып менә. Ҡапҡа алдында уны тағы апостол ҡаршылай. Артабанғы тәүлектә хаким болоттарҙан болоттарға һикереп йөрөй, музыка ҡоралдарында уйнай, доғалар ҡыла, йырлай, күңел аса. Ә шулай ҙа был көн бик оҙаҡ үткән һымаҡ тойола уға. Бына көн аҙағында апостол килә һәм хакимдан шулай тип һорай:**

**- Әфәндем, һеҙ бер тәүлек тамуҡта, бер тәүлек ожмахта йәшәп алдығыҙ. Хәҙер инһә хәл итегеҙ: мәңгелегегеҙҙе ҡайҙа үткәрәсәкһегеҙ?**

**Хаким бер аҙ уйлап тора ла:**

**- Әлбиттә, ожмахта матур, яҡшы, ләкин миңә тамуҡ нығыраҡ оҡшаны бит әле, - ти.**

**Апостол, яурындарын ғына һикертеп ала ла, хакимды лифт янына алып китә. Лифт асылғас, хаким алдында... сүп-сар өйөлөп ятҡан киң буш ялан хасил була. Ә баяғы дуҫтары эшсе кейемдәре кейеп алып, ул сүп-сарҙы ҡара пакеттарға тултырып йөрөй. Хаким эргәһенә Шайтан йүгереп килеп етә һәм уны сәләмләп, ҡосаҡлап ала.**

**- Аңламайым... - тип мығырлана хаким ауыҙ эсенән. - Кисә бит бында бөтөнләй икенсе күренеш ине...**

**Шайтан уға ҡарап ауыҙын йыра һәм:**

**- Дуҫҡайым, кисә бит бында һайлау алды кампанияһы ине. Ә бөгөн һин беҙҙең өсөн тауыш бирҙең инде...**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Азамат ӘБҮТАЛИПОВ, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес: **450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru** **kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | 253-25-44 |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | 246-03-24 |
| **Бухгалтерия** | 246-03-23 |
| **Хәбәрселәр** | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 31 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4700
Заказ 3802